Башҡортостан Республикаһы
Бөрө районы муниципаль районының
Биләмә-ара китапхана системаһы
муниципаль бюджет мәҙәниәт учреждениеһы
Үҙәк биләмә-ара китапханаһы



# ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНА

(1905-1954)

Бөрө

Төҙөүсенән

Был дайджест башҡорт халкының һөйөклө ҡыҙы, күренекле халыҡ яҙыусыһы, «Һәҙиә» романының прототибы Һәҙиә Дәүләтшинаға бағышланды. Унда яҙыусының тормошо һәм ижады тураһындагы материалдар тупланды.

Дайджест әҙәбиәт укытыусыларына, студенттарға, китапханасыларға һәм Һәҙиә Дәүләтшинаның ижад тормошо менән ҡыҙыҡһыныусы күп һанлы укыусыларға тәғәйенләнә.

# Башкорт кызына

*Һәҙиә Дәүләтшинаға*

Урал тауҙарының буйында,
Оҙон-оҙон быуат буйына,
Буйһонмайса яуыз яҙмышка,
Уның менән кыйыу алышкан
Башкорт кыҙҙарын мин йырларға
Ҡәләм алдыниһәм кулдарға,
Һәҙиә, һин алға баҫаһың,
Һине данлап килә яҙаһым.

Башкорт кызы әсе сеңләгән,
Тик һис кемгә башын эймәгән,
Йөҙгә пәрәнжә лә кеймәгән.
Ир-егеттәй һыбай менгән ул,
Иркен яулап, яуға елгән ул,
Үлем күҙенә бағып, көлгән ул! –
Һәҙиәкәй, һинең һының был,
Замандашым, килсе, йырым бул!

Башкорт кыҙы ярһыу йөрәкле,
Һүнеү белмәҫ кайнар теләкле;
Йырға бик бай уның күңеле,
Ҡоштар осоуындай бейеүе!
Мөхәббәте уның - ут кеүек,
Ә нәфрәте - һалкын, боҙ кеүек.
Үҙе дәртле, үҙе бик түҙем,
Һәҙиәкәй, был бит һин үҙең!
Ғәрәп һүҙе булған Һәҙиә,
Бүләк тигән һүҙ ул беҙҙеңсә.

Башкорт, теләп һиңә ҙур теләк,
Биреп һиңә кайнар, куш йөрәк,
Бүләк итте һине халыктарға,
Даның шаулар бөтә яктарҙа.
Йөҙөк кашы булдың халкыңдың,
Һәҙиәкәй, йырың ялкынлы.

Йәмле, шаулы Ырғыҙ буйҙарын,
Ыргыҙ буйҙарының кыҙҙарын,
Уның арыҫландай улдарын,
Шағирә, һин данлап йырланың.
Ғашиҡ инең беҙҙең заманға,
Йырың тынмай һаман, һаман да.
Һәҙиәкәй, һүҙең тутыкмаҫ,
Илең һине һиҫ тә онотмаҫ.

Ғәйнан Әмири

**Г.Каскынова**

# Һәҙиә Дәүләтшина тормошонда Бөрө ҡалаһының роле

Ағиҙел ярында ултырған элекке сауҙәгәрҙәр ҡалаһы Бөрө үҙендә башҡорт халҡының һөйөклө ҡыҙы Һәҙиә Дәүләтшина тураһындағы иҫтәлектәрҙе ҡәҙерләп һаҡлай. Әҙибәнең "Ырғыҙ" романына һуңғы нөктә ҡуйылған төбәк, изге һөйәгенең мәңгелек төйәгенә әүерелгән тупраҡ ул Бөрө.







Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһының үҙәк бинаһы алдында скульптор Ғүмәр Мөхәмәтшиндың ижад емеше, яҙыусының бюсы ҡаршылай. Ә инде Башҡорт филологияһы кафедраһы янындағы мемориаль музейҙа Һәҙиә Дәүләтшинаның беҙ бала сактан яратып ҡараған тиҫтәләгән фотоһүрәттәре, "Ырғыҙ" романының машинкала баҫтырылған биттәре һалынған папкалар, әҙибә үҙ ҡулы менән сиккән, теккән әйберҙәр һ.б. экспонаттар бергә тупланған. Филология факультетының башҡорт бүлеге ҡәҙерләп һаҡлай был изге ҡомартҡыларҙы.

1951-1954 йылдарҙа ҡаланың тигеҙһеҙ урамдары буйлап ябай ғына кейемле ҡатын көн һайын үҙе йыйыштырыусы булып эшләгән учреждениеға йәки китапханаға китеп барған сакта бер кем дә уның билдәле яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина икәнлеген уйына ла килтермәй. Китапханасы А.И.Лямина хәтирәләре буйынса, Октябрь революцияһы, граждандар һуғышы, Башҡортостан тарихы буйынса етди хезмәттәрҙе йотлоғоп уҡыған Дәүләтшина китапханасыларҙы ла аптырашта ҡалдыра торған була.

Үпкә туберкулезы менән ауырыған Һәҙиә Дәүләтшина ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем "Ырғыҙ" романының донъя күреүен көтөп йәшәй, юғары инстанцияларға, Яҙыусылар союзына, СССР Яҙыусылар союзының етәкçеһе А.А.Фадеевка хаттар яҙа, әҫәренә яңынан-яңы төҙәтмәләр индерә.

Үлер алдынан Бөрө больницаһында тамамлаған шиғыры бөтөнләй таң ҡалдыра. Сикһеҙ оптимизм менән һуғарған, шаян, уйнаҡ тел менән яҙылған шиғыр ул. Был дәүерҙә ижадҡа мөкиббән ҡатын-ҡыҙҙар аҙ сакта яҙылған шиғыр Һәҙиә Дәүләтшинаның сирле мәлендәге күңел һәләтен асып һала:

*Үткер уғын шаян Купидон*
*Йөрәгемә сәнскән урталай.*
*Беҙҙә булмай уның дауаһы*
*Бөтә барлығымды ут алған.*

Фажиғәле яҙмышлы әҙибәнең бөтә ижади ғүмерен ҡылыҡһырларҙай юлдар шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарына һыйған:

*Бик һирәк ул ысын ялҡынлы "сир"*
*Һуңғы тапҡыр дөрләп янайым!..*

Әҙибә ҡаланың Мосолман зыяратында ерләнгән. Әсәһе Гөлйәүһәр Ильясова ҡыҙының ҡәберенә һәйбәт һәйкәл-таш ҡуйҙырған. Ташҡа "Давлетшина Х.Л. Всегда без устали служила Родине" тигән һүҙҙәр ырылған. Филология факультетының башҡорт бүлеге студенттары был изге тупраҡты тәрбиәләп торорға тырышалар. Тик эргәләге рәшәткәһеҙ, ер менән тигеҙләнә барған асыҡ ҡәберҙәрҙең күбәйеүе йылдан-йыл зыяратҡа инеүҙе ҡыйынлаштыра, әҙибәбеҙҙең,

һуңғы төйәге төптәрәк ҡала бара. Башҡорт әҙәбиәтендәге тәүге ҡатын-ҡыҙ романсының ҡәбере халыҡ күрә алыр ерҙә булмауы үкенесле, әлбиттә.

Һәҙиә Дәүләтшина яҙмышының Бөрө осоро ғәмлене, уйлыны уйландырыр мәсьәлә. Оло шәхесебеҙгә үҙ заманында күрһәтелгән вайымһыҙлыкты ҡабатламаһаҡ ине: ҡәбер ташындағы яҙыуҙарҙы яңыртыу ҙа беҙҙең намыҫыбыҙҙа.

**// Бөрө шишмәләре. – 2008. – 8 апрель (№ 4). – 3-б.**

**Гөлсирә Ғиззәтуллина**

## БЫҒАУҘАРҘА КИЛЕШ АЗАТ ҠАЛДЫ

"Бығауҙарҙа килеш азат ҡалдым", - тигән Һиндостандың мәшһүр шағиры Кәбир. "Мансурҙы язалайбыҙ тип уйлайһығыҙмы? Һез бит минең бахыр тәнемде генә тураклайһығыҙ", - тип көлгән дошмандарынан данлыҡлы суфый Мансур әл-Халадж берәм-берәм аяҡ-ҡулдарын ҡырҡып өҙгән сакта. Был һүҙҙәре менән улар күк аҫтында рух азатлығы тигән бөйөк ҡаҙаныштың да барлығы хаҡында беҙгә еткерергә теләгәндәр. Әҙәм балаһын баштан-аяҡ сылбыр менән сырмап, ҡырҡ тимер ишекле тимер зиндан эсенә бикләп ҡуйһаң да, һауалағы ҡош, һыуҙағы балыҡ кеүек ирекле ҡалырға сараһы бар икәнен тәғбирләгәндәр. Фашистарҙың концентрацион лагеры аша үткән күренекле психиатр Виктор Франкл да тормошоноң иң ауыр мәлендә, кешене әҙәмлектән сығарыу өсөн уйлап табылған барлыҡ кәмһетеүҙәрҙе башынан үткәргән сакта аскан үҙенә был хәкикәтте. Шул асышы уны ғына түгел, янындағы байтаҡ тотҡондарҙы акылдан шашыуҙан һәм үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан йолоп алып ҡалған. Аҙактан ғалим уны "кешенең иң һуңғы, иң актыҡ азатлығы" тип атай. Язалаусылар ни тиклем ғазапламаһын, кәмһетмәһен, әҙәмлектән сығарырға маташмаһын, аңлы йән эйәһе булғанлыҡтан, кеше үҙенең рухын емерелеүҙән ҡурсалап ҡала алғанын иҫбатлай ул.

Был башҡа һыймаҫлыҡ ауыр ғилем. Уны йәһәннәм ғазаптарын ерҙә кисерергә мәжбүр булғандарҙан бик һирәктәр генә үҙләштерә алған. Күптәр һынған. Һындырғандар. Әммә: "Мин бер ваҡытта ла һынған кешеләрҙе ғәйепләмәнем, - ти күренекле яҙыусы Фазыл Искәндәр. - Әгәр кеше һынмаған икән, тимәк, уны етерлек кимәлдә бөкмәгәндәр. Акылдан шашмайынса кисереп булмаҫлыҡ нәмәләр ҙә бар". Хаҡ һәм миһырбанлы һүҙҙәр. Ысынлап та, бындай мәлдә әҙәм әҙәмгә хөкөмдар түгел. Шуға күрә кешене өнһөҙ хайуанға әйләндереү максатында махсус рәүештә ғазаплаған шарттарҙа үҙ-үҙен йәнсетмәйсә еңеүсе булып сыҡҡан бөйөк рухлыларҙың тәжрибәһенең баһаһы әйтеп биргеһеҙ ҡәҙерле.

Һәҙиә Дәүләтшина тураһында уйлағанда иң элек мине уның ана шул рухи бөйөклөгө хайран итә. Ғүмер буйы йөрәк һәм үпкә сиренән йонсоған сибек кенә ҡатын намыҫына кәтрә ҡәҙәрле лә тап төшөрмәй үткәрә был һынауҙарҙы. Нисек? Шуны аңларға теләүем арҡаһында ҡулыма ҡәләм алырға йөрьәт итәм һәм замандаштары калдырған иҫтәлектәрҙән, уның әҫәрҙәренән якты һынын күҙ алдына баҫтырырға тырышам.

"Һәҙиә апа А.П.Чеховтың матур кеше тураһындағы идеалына артығы менән тап килә ине - уның йөҙө лә, уйҙары ла, кейеме лә гүзәл ине. Уның рухы ла, ҡылығы ла сибәр ине. Күңеленең сиктән тыш иркәлеге, йомшаклығы, кешеләргә ҡарата йылы мөнәсәбәттә булыуы, уларға гел яҡшылыҡ эшләргә әҙер тороуы, алсаҡлығы, баҫалкылығы, сабырлығы, зирәк акыллы, иркә телле булыуы - ҡылығының ошоға оҡшаған башка сифаттары уның матурлығын тағы ла арттыралар ине", - тип яҙа уның менән Башҡорт дәүләт педагогия институтында бергә уҡыған яҙыусы Ғайнан Әмири. Әҙибәне күреп белгән барыһы ла уның күңелдәрҙе иретерлек йылмайыуын

һәм "күгәрсен гөрләгәнен хәтерләткән яғымлы тауышын" иҫкә ала. "Һәҙиә апайҙың йылмайыуы уға ғына хаҫ йылмайыу булыр ине, унының шикелле ысын күңелдән кешене яратып йылмайғанды күргәнем юк әле минең - тип хәтерләй Шакирә Ишкинина. - Ул үҙенең талантын да бер ваҡытта ла һыҙыҡ өҫтөнә алманы, ҙур кешенең ҡатыны мин, тип тә һауалана белмәне. Бындай ҡылыҡ унының тәбиғәтенә бөтөнләй ят ине".

Яҙмышы уң һәм бәхетле булһын өсөн уға барыһы ла мул бирелгән. Матурлығы ла уттарға һалыр, күҙҙе ҡамаштырып, өтөп алырлыҡ яндырай түгел, ә күңелде йыуатыр, күҙҙе ҡыуандырыр тыйнаҡ һәм һөйкөмлө. Ундайҙарҙы буйһондорғо, әсир итке түгел, ҡурсалағы, уларға һыйынғы һәм йылынғы килеүсән. Тыйнаҡ сабырлыҡ, алсаҡлыҡ, күңел сафлығы һәм сикһеҙ ярҙамсыллыҡ. Бындай холоҡ эргә-тирәләге кешеләргә лә ыңғай ЙОҒОНТО яһай, ундайҙар янында яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ булыу теләге тыуа. Хатта аяуһыҙ заманы ла башта уға ифрат миһырбанлы мөнәсәбәттә. Былай тигәндә иң беренсе революцияны күҙ уңында тотам. Миллиондарса кешеләрҙең яҙмышын селпәрәмә килтергән бөйөк түңкәрелеш Һәҙиә һәм Ғөбәй Дәүләтшиндар, Дауыт Юлтый кеүек мендәрсә башҡорт ялпыһы өсөн ҙур мөмкинлектәр аса. Быны инҡар итеү мөмкин дә, кәрәк тә түгел.

Һамар губернаһының Хәсән ауылында тыуып үҫкән фәҡир балаһы, совет власы булмаһа, атаһы тиф ауырыуынан үлеп киткәс, ниндәй тормошҡа дусар булыр ине? Быға тиклем остабикәнең ҡыҙҙар мәҙрәсәһенә йөрөп бер ни тиклем һабаҡ өйрәнгән зирәк һәм отҡор Һәҙиә, совет мәктәбендә белемен арттырғандан һуң тыуған ауылы Хәсәндән 25-30 саҡырымда ятҡан Диңгеҙбайға уҡытыусы итеп ебәрелә. Батша заманында был һис мөмкин булмаҫ ине. Тәбәнәгерәк буйлы, оялсан ғына сибек бер ҡыҙыҡай була ул был саҡта. Әммә ул уҡытҡан ҡыҙҙар бер ҡыш эсендә уҡырға һәм яҙырга өйрәнеп ала. Уҡытыусы йәштәргә аң-белем биреү, культура-ағартыу эштәрен ойоштороу менән дә шөғөлләнә. "Был эштең ауырлығы ҡулай бинаның юклығы менән бәйле ине. Оҙаҡ михнәтләнә торғас, ауыл коммунистары һәм комсомолдары тирә-яҡҡа даны сыҡҡан Шәйәхмәт мулланың ике ҡатлы ағаҫ йортон тартып алды. Бында Һәҙиә апайҙың роле аҙ булманы, әлбиттә. Ошо хәлдән һуң ауыл ҡарттары "кеше талаусы" коммунистарҙы, шул исәптән "диндән яҙған", "кафыр" Һәҙиәне лә ҡарғарға, нәфрәт уҡырға тотондо", - тип хәтерләй ҡәрҙәше Садиҡ Байтурин. "Ул осорҙа Илек волкомында ойоштороусы булып эшләгәнлектән, Диңгезбай ауыл ячейкаһы секретары Һәҙиә Ильясова менән осраша торғайным. Волостағы һигеҙ ауыл буйынса беренсе мәртәбә концерт, әҙәби кисә ҡуйып йөрөнөк, - тип яҙа иҫтәлектәрендә яҡташы Әхмәт Йәрмөхәмәтов. - Һәҙиә уҡытыусы буларак ауылда абруйлы булһа, комсомол эштәрен башҡарыуы менән бөтә волоста данлы кеше ине. Шул осорҙа ЧОН-дың (айырым тәғәйенләнеш отрядтары - *ред.)* ирекле дивизионына йәштәрҙе ылыҡтырыу буйынса агитбригада ойошторола. Бригадаға өйәҙ комитеты тарафынан ебәрелгән Ғөбәй Дәүләтшин етәкселек итә. Һәҙиәнең Ғөбәй менән танышыуы шул йылдарҙа булды."

Был яҡтарҙа граждандар һуғышы айырыуса аяуһыҙ һәм көсөргәнешле бара. Ваҡ-ваҡ отрядтарға берләшкән аҡ бандиттар совет яҡлыларҙы аяуһыҙ яҙалай. Улар ҡулынан һикһәнгә яҡын уҡытыусы һәләк була. Шуға ҡарамаҫтан, ун биш йәшлек Һәҙиә, уҡытыу эшенән башҡа, мулланың өйөндә төрлө уйындар, йыр-бейеү, шиғыр һөйләүҙәр үткәрә. Бер саҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡһыҙлығы, мулла-мотағайҙарға ҡаршы көрәше тураһында спектакль ҡуялар. Былар барыһы ла "йылмайып ҡына һөйләшер, яғымлылығы һәм һөйкөмлөлөгө менән һәр кемде арбай алыр" ҡыҙыҡайҙың характеры ниндәй шарттарҙа сынығыу алғанын, үҙаллыЛЫҒЫН һәм ҡыйыулығын дәлилләй. Бандалар айырыуса әүҙемләшеп, ауылда ҡалыу үлемесле хәүефкә әйләнгәс, Һәҙиәне ҡасырып тигәндәй Һамарға ебәрәләр. Ул шунда губерна комитетында эшләгән Ғөбәй Дәүләтшинға тормошҡа сыға.

Сабый ғына сактан етем ҡалып кеше тупһаһында үҫкән Ғөбәй бәләкәйҙән батраклыкта йөрөгән. Беренсе бөтә донъя һуғышының тәүге көндәренән үк һуғышҡа алынған һәм өс йыл буйы кан ҡойошло алыштарҙа ҡатнашкан. Февраль революцияһын окопта ҡаршылаған. Фронттан Мәскәүгә Беренсе Бөтә Рәсәй мосолмандары съезына коммунистарға теләктәш буларак делегат булып барған, шул уҡ йылды коммунистар партияһына ингән, граждандар һуғышында ҡатнашкан, ауылдарҙа советтар ойоштороған, партияның өйәҙ комитетында эшләп өлгөргән. Һәҙиә менән өйләнешкәндә ул утты-һыуҙы үткән 28 йәшлек уҙаман. Күҙҙәре янып торған, ҒӘЙӘТ һылыу һәм хатта бер ни тиклем көйәҙ егет. Һәҙиәнең дә шул осорҙағы фотоһы һаҡланған. Биттәре тулы ғына булып алланып торған, үткер һәм көләс ҡарашлы, ҒӘЙӘТ ТӘ һылыу ун алты йәшлек ҡыҙ.

Һәҙиә Һамарҙа яңы ғына ойошторолған татар-башҡорт педагогия техникумына уҡырга инә. Йотлоғоп китаптар укырға керешә, татар-башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре менән таныша, рус телен өйрәнә. Ғөбәй 1922 йылда тағы ла яуаплыраҡ урынға, ВКП(б) Үҙәк Комитетының татар-башҡорт бүлеге ағзаһы итеп һайлана, һәм йәш ғаилә Мәскәүгә күсеп китә. Был осорҙағы бәхете һәм күңел күтәренкелеге тураһында Һәҙиәнең оҙаҡ йылдарҙан һуң яҙылған бер шиғыры һөйләй:

Әле ун һигеҙем тулмағайны  
Кремлде тәүләп күргәндә.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ни тиклем үҙгәреш! Кисә генә Һамар далаларында ялан аяк йүгергән ҡыҙ уҙа барһа ике-өс йыл эсендә Кремлде күрә, Мәскәүҙә йәшәй. Ә 1922 йылдың аҙағында башҡорт хөкүмәтенең юллауы буйынса Ғөбәй Дәүләтшин Башкортостанға эшкә күсерелә.

Ул осор, ни тиклем генә ҡатмарлы, фажиғәле һәм ауыр булмаһын, иҫ киткес күтәренкелек менән һуғарылған. Киләсәктең матур буласағына ышаныс, кешеләргә, айырыуса йәштәргә, әйтерһең дә, ҡанат ҡуйған. Улар мөкиббән китеп, янып йәшәгән. 1932 йылда һиғеҙ ай самаһы Өфөлә ижади командировкала булған Александр Фадеев башҡорт йәштәренең мәҙәниәткә ынтылышын һүрәтләп Максим Горькийға былай тип яҙа: "...Тамашасылар араһында ауылдан килгән имсәк балалы йәш кенә башҡорт ҡатыны ултыра ине. Сәхнәләге дөбөр-шатырҙан йоклап китә алмаған сабыйына әле һул, әле уң түшен ҡаптыра, әммә пьеса бөткәнсе ултырҙы. Әлбиттә, бала менән төнгө бергә тиклем ултырыу мәҙәниәтле түгел, әммә уның театрға тартылыуы бик шәп".

Һәр сак ҙур урындарҙа, яуаплы вазифаларҙа эшләгән кешенең ҡатыны буларак, Һәҙиәгә яңы формалашып килгән башҡорт интеллигенцияһының иң сағыу шәхестәре менән аралашып йәшәү бәхете тейә. Ә бит был ифрат әһәмиәтле, сөнки тормошта үҙ урыныңды табыу, һәләттәреңде үҫтереү өсөн талант һәм тырышлыҡ ҡына етмәй. Юлыңда кәҙереңде белгән, тейешенсә баһалаған һәм күңелеңде үҫтергән кешеләрҙең осрауы шарт. Был йәһәттән, әлбиттә, Һәҙиәгә ире Ғөбәй Дәүләтшиндың ЙОҒОНтоһо баһалап бөткөһөҙ. Ҡасан ғына сыбыркыһын һөйрәп байҙарға мал көткән етем малайҙың нарком дәрәжәһенә күтәрелеүе, Ҡыҙыл профессура тамамлауы уның һәр йәһәттән ҙур һәләттәргә эйә булыуы, зирәк акылы һәм тырышлығы тураһында һөйләй. Ул Өфөлә Ғилми үҙәк мөдире, Башкортостан китап нәшриәтенең баш мөхәррире, Башкорт дәүләт педагогия институты директоры, Башкортостан мәғариф халыҡ комиссары булып эшләй. Һәләтле ойоштороусы, ялкынлы эшмәкәр генә түгел, әҙәбиәттең һутын, тәмен, әһәмиәтен тәрәнтен аңлаған үҙенсәлекле яҙыусы ла була. Ғөмүмән, замандаштарының хәтирәләренән уның сағыу булмышы айырым-асыҡ булып күҙ алдына баҫа. Бына уны Сәләх Кулибай нисек һүрәтләй: "1929 йыл, Сәнғәт һарайындағы концерт. Танылған ҡурайсылар Ғиниәт Ушанов, Йомабай Иҫәнбаев, күренекле артистар Ғабдулла Минһажев, Бәҙәр Йосоповалар СЫҒЫШ яһай.

Концерттың азағында залдың алғы рәттәрендә ултырыусылар бер ауыҙҙан: "Ғөбәй Дәүләтшинды һорайбыҙ!" - тип ҡысҡырып ебәрзеләр. Залдағы тауыш, ҡул сабыу көсәйгәндән-көсәйә барҙы. Ахырҙа алғы рәттә ултырыусылар араһынан ҡулына бәләкәй сумаҙан тотҡан бер кеше урынынан тороп, ишектән сығып юғалды... "Ғәлиәбаныу" көйө бер тапҡыр уйналып, икенсе ҡат башланып китеүгә, ҡып-ҡыҙыл итек кейгән, тәпәш, баҙыҡ кәүҙәле, маңлайы пеләшерәк, бармаҡ баҫымындай мыйыҡлы кеше, көй ритмына башҡорт бейеүенең башланғыс фигураларын яһап, сәхнәнең артҡы уң мөйөшөнән алғы һул мөйөшөнә үтте. Ҍуңынан мин уның бындай оло кисәләргә бәләкәй сумаҙанға һалынған ҡыҙыл итекһеҙ килмәүен белдем. Ҡыҙыл итек... "Ғәлиәбаныу" көйөнә бейеү... "Зилский" исемле повестың, "Ҡуңалтаҡ тормош" тигән хикәйәләр китабының авторы... Ғөбәй Дәүләтшин ғәжәп үҙенсәлекле, фәҡәт Һамар башҡорттарына хас йылы һүҙҙе теләгәнсә эскерһеҙ ҡабул итеүсән, үҙе лә башҡаларға ҡарата йылы һүҙ, мәрәкәләшеүгә һаранлыҡ күрһәтмәүсән, бай һүҙлекле яҙыусы ине".

16 ғына йәшендә Һәҙиә бына шундай ҙур шәхестең хәстәрлекле ҡанаты аҫтына эләгә. Әҙәбиәт менән ныҡлап шөғөлләнә башлағас, уға Төхфәт Йәнәби, Дауыт Юлтый, һуңынанырак Имай Насыри кеүек күркәм кешеләрҙең ярҙамы тейә. 1928 йылда Дәүләтшиндар Дауыт Юлтыйҙар менән бер йортта күрше булып йәшәй, аҙаҡтан да гелән аралаша, ғаиләләре менән дуҫтанә мөнәсәбәттә була. "Дауыт янына инеп, яҙған әйберҙәрен уҡып кәңәшләшә, әҙәбиәт, тәнкит хаҡында, әйләнә-тирәләге донъя хәлдәре тураһында фекер алыша торғайны, - тип яҙа күренекле яҙыусының йәмәғәте Фатима Юлтыева. - Мин эсемдән генә уға һоҡланып, уның шулай иркен фекер йөрөтөүенә шатланып, ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла шундай асыҡ фекерле, талантлы ҡарындашыбыҙ булыуына ғорурланып, өндәшмәй генә тыңлап ултыра инем".

Әҙәбиәткә йәштәр эркелеп килгән ул осорҙа Һәҙиә Дәүләтшинаның тәүге хикәйәләре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Ә инде "Айбикә" повесы өлгөргәнлеге, теленең байлығы менән ул йылдарҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙең күбеһенән айырылып торғанға, уны Ғөбәй Дәүләтшин яҙып биргәндер, тигән ғәйбәт тә йөрөп ала. Әммә әҙибә артабанғы әҫәрҙәре, мәҡәләләре менән был имеш-мимештәрҙең ерлекһеҙ булыуын шул заманда уҡ иҫбат итә.

Ҡәләмдәштәре араһында абруй яулаған әҙибә, Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты студенткаһы, СССР яҙыусыларының беренсе съезында, СССР яҙыусыларының Минск ҡалаһында үткәрелгән пленумында делегат булып ҡатнаша, Өфө ҡала советына депутат итеп һайлана. "Айбикә" повесы тәүҙә башҡортса, унан русса китап булып донъя күрә. Репрессияға дусар ителгәнгә тиклем Һәҙиә Дәүләтшина шәхес буларак та, яҙыусы буларак та формалашып, һәләте тейешенсә баһаланып өлгөрә. Артабанғы яҙмышы өсөн был ифрат мөһим.

Шәхес культы заманының һалҡын һулышы, ете тиҫтәнән ашыуырак йылдар үтһә лә, әле һаман ҡороштора. Кешеләрҙең шундай террор шарттарында ла йәшәргә, эшләргә һәм хатта ижад итергә ынтылыуына хайран ҡалаһың. Был, моғайын, репрессияларҙың ҡапыл түгел, тоҡана-һүнә, яйлап барыуына бәйләнгәндер. Йәш совет власының тәүге йылдарынан уҡ синфи дошман эҙләү, фашлау һәм уларҙы юҡ итергә саҡырыуҙар көн үҙәгенән төшмәй. Буржуаз милләтселәргә, солтанғәлиевщинаға, троцкистар һәм бухаринсыларға ҡаршы кампаниялар бер-бер артлы үткәрелә. Лосев, Флоренский кеүек выждан һәм аҡыл эйәләре Беломор каналын соҡой, Соловкиҙа серей, милли интеллигенция вәкилдәренең бер төркөмө инде төрмә һәм лагерҙарҙа ултыра, ҡулаҡтар Себер һөрөлгән. Киров үлтерелгәндән һуң һәр төрлө ғәйепләүҙәр, башҡаса фекер йөрөтөүселәрҙе маҡсатлы рәүештә эҙләү тағы ла киңерәк ҡолас алған. Сталиндың, социализм нығынған

һайын, синфи көрәштең киҫкенләшеүе тураһындағы тезисы һәр кемде "синфи һиҙгерлек" күрһәтергә өндәй. Был һиҙгерлектең ниндәй ҡолас йәйеүе бер генә мәғлүмәттән дә асыҡ күренә: илдә 1926-1953 йылдарҙа 42 миллион кеше төрмәләр һәм лагерҙар аша үткән.

Фашлауҙар халыҡтың дөйөм хуплауы аҫтында бара. Тормоштоң уртаһында ҡайнаған әүҙем позициялы кешеләр булараҡ, Дәүләтшиндар үҙҙәре лә, әлбиттә, был ваҡиғаларҙан ситтә ҡалмаған. Уларҙың тормошо, үҫеше, өлгөрөүе барыһы ла ошо ерлектә барған. Һәм бына был һәр саҡ көйрәп, быҫҡып торған ут 1937 йылда тағы ла нығыраҡ тоҡана һәм уларҙы ла ялмап ала.

Ире Ғөбәй һәм улар аралашып йәшәгән бик күп кешеләр - дәүләт эшмәкәрҙәре, артистар, яҙыусылар - ҡулға алынғас, бер мәлдә, туғандарының өгөтөнә бирелеп, Һәҙиә Өфөнән китергә тәүәккәлләй. Садиҡ Байтурин уны Һамарға алып ҡайта. Ҡасан ғына совет власы өсөн көрәшкән ҡыҙыҡай аҡ бандаларҙан ҡасып ошо Һамарга килгәйне. Уҙа барһа 16 йыл үткәс, шул властан ҡасып кире ҡайта. Үҙенә бөтөнөһөн дә биргән властан, партиянан ҡасып... Әлбиттә, был уның өсөн башҡа һыймаҫлыҡ мәғәнәһеҙлек, бары тик ваҡытлыса яңылышлыҡ, хата булып тойола.

"1937 йылдың сентябре ине булһа кәрәк, - тип хәтерләй Садиҡ ағай. - Беҙ уның менән Куйбышевтағы күптәнге танышыбыҙ, татар шағиры, ВКП(б)-ның Урта Иҙел край комитеты органы булган "Колхозсы" гәзитенең редакторы Сахап Урайскийҙабыҙ.

- Һәҙиә ханым, һеҙ беҙҙә эшкә ҡалырға тейешһегеҙ. Беҙҙә әҙәби эшселәр етешмәй, уларға ныҡ һыуһайбыҙ, - тип сат йәбеште Урайский.

Уның был өгөтөнә Һәҙиә апай яуап бирергә ашыҡманы.

- Һәҙиә апай Диңгезбай ауылына уҡытыусы итеп тәғәйенләнде, ауыл халҡы уны көтә, - тип ҡаршы төштөм.

Оҙаҡ тарткылашкандан һуң, бер ҡарарға ла килә алмай, төн урталарында йоҡларға яттыҡ. Иртән Һәҙиә апай:

—Ҡустым, ил ни күрә, мин дә шуны күрәйем. Ниңә мин илдән, таныш-тоноштарҙан айырылып, ҡаскын кеше һымаҡ сит ерҙәрҙә йәшәйем инде, әйҙә ҡайттыҡ Өфөгә, - тине".

Тормоштарының маҡсаты халыкка һәм партияға хеҙмәт итеү булған революция балалары өсөн хыянат башка һыймаслыҡ бер нәмә кеүек тойола. Партия өсөн йәнеңде бирергә кәрәк, тиһәләр, улар бер ниндәй шикләнеү, үкенеүһеҙ ғүмерҙәрен фиҙа ҡылыр ине. Шуға күрә ғәйепле кеше кеүек ҡасып йөрөү үлемдең үҙенән дә ҡурҡыныс булып күренә. Бында йәшәү менән үлем түгел, выждан алғы планға сыға.

Шул уҡ ваҡытта, үҙҙәренең һәм яҡындарының ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн ирҙәренән һәм ҡатындарынан, аталарынан һәм балаларынан ваз кисергә мәжбүр ителгәндәр ҙа байтаҡ була. Һәҙиә намыҫына ҡаршы бара алмай, һәм был, тоғролоғо менән сафлығы уны төрмәгә алып килһә лә, физик һәм психологик ғазаптарға дусар итһә лә, шәхесен емермәү, рухын һындырмау өсөн төп шарт булған. Сөнки кешелеклегеңде һаҡлап ҡалыу өсөн үҙ-үҙеңде ихтирам итеү бик мөһим. Ижадсы өсөн айырыуса. Рух донъяһының аяуһыҙ, әммә ғәҙел һәм талапсан ҡанундары шундай. Һәҙиә Дәүләтшина шул ауыр, әммә берҙән-бер дөрөҫ юлды һайлай.

Әҙәм балаһына, ғөмүмән, ғүмер буйы был һынауҙы үтергә тура килә. Йәшәгәндә һәр саҡ тормош шарттары һәм кешеләр менән ниндәйҙер компромиска барырға, теге йәки был яҡҡа тайпылырға мәжбүрһең, әммә эске, зиһен менән дә бәйләнмәгән ниндәйҙер үҙаллы, мөстәҡил бер өлөшөң һәр саҡ уяу тора. Был һынау экстремаль мәлдәрҙә, төрмә һәм лагерь шарттарында айырыуса ныҡ киҫкенләшә. Тик, хатта үлем ҡурҡынысы янағанда ла, ниндәйҙер бер сикте үтергә ярамай. Хәйер, ул сикте утһәң дә, үҙеңә аҡлау

табаһың, әммә булмышында ниҙер сатнай, һына һәм кешелеклеккә ҡабат юл ябыла, тип раҫлай әсирлек әсеһен татығандар.

Репрессия осорондағы йыртҡыстарса аяуһыҙлыҡ, язалар бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда башҡа һыймаҫлыҡ мәғәнәһеҙлек булып тойолһа ла, улар билдәле бер бик тә тәғәйен маҡсатҡа йүнәлтелгән. Тоталитар дәүләт үҙаллы фекер йөрөтөргә һәләтле шәхестәрҙе үҙендә һыйҙыра алмай. Һәр бер революцияның иртәме-һуңмы үҙ балаларын ашарға тотоноуы шуға бәйләнгән. Көслө шәхестәр ярҙамында ҡулына власты алған хаким, артабан уны һаҡлап ҡалыр өсөн, азатлыҡтың тәмен татыған, үҙенең баһаһын яҡшы белгән, көслө рухлы, буйһонмаҫ һәм һынмаҫ рухлы көрәштәштәренән берәм-берәм ҡотолорға мәжбүр. Ә революция яһап яулап алған мөмкинлектәрҙе ысын мәғәнәһендә юғары баһалап, кәмһетелгән халыҡ вәкилдәре араһынан юғары мәҙәниәтле, белемле шәхестәр тәрбиәләүҙе тормош маҡсатына әйләндергән милли интеллигенцияның ынтылыштары ысынлап та тоталитар режимдың генераль линияһы менән тап килмәй башлай.

Ғазаплауҙар, төндәр буйы йоклатмайынса аяуһыҙ һорау алыуҙар - барыһы ла, уның иректә ҡалған фекерҙәштәрен фашлауҙан бигерәк, шәхестең үҙен иҫ киткес түбән баһалаған, хатта бөтөнләй ихтирам итмәгән яңы төрөн формалаштырыуға йүнәлтелгән. Ғаҙаплауҙарҙың төп маҡсаты - тотҡондо һәр йәһәттән хәлдән тайҙырып, тәнен дә, психикаһын да эшлектән сығарып, рухын һындырыу булған.

"Һәр яҡлап кәмһетеү, мәсхәрәләү, маҡсатлы рәүештә кешелектән сығарыуға йүнәлтелгән шарттарҙа булмышыңды мөмкин тиклем йәнсетмәй алып ҡалыу, куңелеңде һаклау - иң мөһиме. Тотҡонда сакта кисерештәр бер туктауһыҙ үҙгәреп тора. Йә бер нимәгә нигеҙләнмәгән ярһыу өмөт биләп ала. Шунан күңел төшөнкөлөгөнөң упҡынына уйылып төшәһең. Был ҡайһы берәүҙәрҙе аҡылынан яҙҙырҙы, уларҙы кешелектән сығарҙы һәм йәшәүгә ихтыярын һындырып, һуңғы сиктә үлемгә дусар итте", - тип яҙа күренекле ғалим Б. Биттельхейм "Концлагерҙағы кешеләр" тигән фәнни хеҙмәтендә.

Һәҙиә Дәүләтшина был һынауҙы үтә һәм шәхесен ҡыйралыуҙан һаклап ҡала ала.

Ер иҙәнле саман өйҙә тыуып үҫкән ярлы балаһы өсөн лагерҙағы көнкүреш уңайһыҙлыҡтары үтә ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырғандыр тип уйламайым. Уның өсөн матди мөхит бер ваҡытта ла үҙмаҡсат булмаған. Шулай уҡ бер генә минутҡа ла яңғыҙ ҡала алмауға ла артыҡ ауырһынмағандыр, сөнки ғүмере буйы ҡыҫынҡы шарттарҙа көн иткән. Ҡайҙа ғына йәшәһәләр ҙә, Дәүләтшиндарҙа гелән кеше ҡайнап торған. Етем-еһер, уҡырға урынлашырға килгән йәштәр, алыҫ һәм яҡын туғандар уларға килеп һыйынған.

Лагерҙа ла кешеләргә күңеле һәр саҡ асыҡ була Һәҙиәнең. "Эштән бушаған арала уның эргәһенә килә лә нағышлап матур итеп сиккәнен ҡарап ултырырға ярата торғайным", - тип хәтерләй Фатима Юлтыева. Әсәһе Гөлйәүһәр кеүек тегеү-сигеүгә оҫта булған Һәҙиә тотҡонлоҡта ла уңғанлығы менән танылa. Нормаһын өс йөҙ процентҡа арттырып үтәгән өсөн "ударница" исеме бирәләр, "өс йөҙөнсө" тип маҡтайҙар.

Халҡына ҡайҙа ла файҙа килтерә алыуы уның өсөн бик мөһим булған һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән һаклаған. Ә ижад ҡомары лагерҙағы ғазаплы ысынбарлыҡтан алыҫҡа, геройҙары йәшәгән икенсе донъяға касырға мөмкинлек биргән. Быңың ҡайһылай ылыҡтырғыс һәм ләззәтле булғанын "Ырғыҙ"ҙағы тәбиғәт күренештәренең ни тиклем һутлы итеп, тәмләп һүрәтләнеүенән дә күрергә мөмкин.

Илһам ижадсыны юғарыға, йыһан аҡылы кимәленә күтәрә. Юғарғы рухи ағым һәм кәҙимге тормош араһында аралашсы булып торған яҙыусы һәләте алдында яуаплылыҡ тойғанда, шәхесенең кимәле менән таланты араһындағы нисбәт бер-

береһенә тап килгәндә тулыһынса асыла. Дәүләтшина шуның бер камил үрнәге. Ижад итеү, яҙыу ихтыяжы әҙибәгә ысын мәғәнәһендә ҡалҡан булған һәм шәхесен кәмһетеүҙән ҡурсалап алып ҡалған.

Башына килгән үҙенсәлекле сағыштырыуҙарҙы, ҡабатланмаҫ образдарҙы, яңы һүҙбәйләнештәрҙе теркәргә мөмкинлектең булмауын да үҙенсә хәл иткән, бынан сығыуҙың йыуаныслы юлын тапкан ул. "Үпкәһенә һалҡын тейеп, йыш ҡына лазаретта ятып сыға торғайны. Был сактарҙа беҙ алмашлап уның хәлен белергә йөрөнөк. Ул: "Бында тик ятыуҙан файҙаланып, әлеге лә баяғы китабым тураһында уйлайым, - ти ине. - Геройҙарымды әүеш-тәүеш килтерәм, уларҙы улай ҙа, былай ҙа итәм. Шулай зыҡ ҡубып ятҡан булам". Мөмкин булған мәлдәрҙә уйлап йөрөгән романын, әкиәт шикелле итеп, һөйләй. Шундай шыма сыға торғайны, әйтерһең һөйләмәй, ә яҙғанды уҡый", - тип хәтерләй лагерҙа уның менән бергә булған Хәҙисә Кәлимуллина, Төхфәт Йәнәбиҙең ҡатыны.

Һаулығының ҡырҡа насарайыуы арҡаһында уны 1942 йылда ирекка сығаралар. Ватан һәм халыҡ өсөн ифрат ауыр йылдар. Фронтта ҡан ҡойошло һуғыштар бара, еңеү көнө йыраҡ әле. "Халыҡ дошманы" мөһөрө тағылған кешегә, әлбиттә, Өфөлә йәшәргә рөхсәт ителмәй. Әммә уның өсөн иң әһәмиәтлеһе шул - хәҙер яҙа ала. Яҙыусы, аслыкка, ялангаслыкка, ауырыуына ҡарамай, романын ҡағыҙға төшөрөргә тотона.

Әҙибәнең ни тиклем ауыр шарттарҙа йәшәүе, "Ырғыҙ"ҙы ижад иткәндә һәм уны тамамлағас ниндәй ҡаршылыҡтарға дусар булыуы хаҡында күп яҙылды. Бында кемдәр ғәйепле һуң, тигән һорауҙар ҙа яңғыраны. Тик йәшәйештең үҙ, йыш ҡына аяуһыҙ ҡанундары.

Һәҙиә Дәүләтшина романын тамамлап, уны ҡәләмдәштәре хөкөмөнә алып килгән ваҡытта тормош бөтөнләй үҙгәргән булған. Ҡасандыр уның күҙенә ҡарап, апай, тип өҙөлөп торған егеттәр хәҙер инде - Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында тыуған илде фашистарҙан һаклап ҡан ҡойған, Гитлерҙы үҙ өңөндә дөмөктөрөп ҡайтҡан ғорур, ҡаһарман ир-уҙамандар. Йәнә шуны ла онотоорға ярамай, улар бит "халыҡ дошмандары"н инҡар итеп нығынған быуын. "Ул саҡта (1937-1938 йылдар) бөтә өлкән яҙыусыларҙы "халыҡ дошмандары" яһап төрмәгә ултыртып бөтөргәндәр ине. 25-30 йәштәге яҙыусылар әҙәбиәттең тәүге "классиктары" булып ҡалғайны. Һәр йыйылышта, һәр бер сығып яһаусы үҙ һүҙен "халыҡ дошмандары фаш ителгәс, беҙгә, йәштәргә юл асылды" тип башлай торғайны", - тип яҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми үҙенең хәтирәләрендә.

Һәҙиә Дәүләтшинаның 1951 йылдың ҡышында романының ҡулъяҙмаһын алып партияның Башҡортостан Өлкә Комитетына килеүен Ғайнан Әмири былай тип хәтерләй: "...Коридорҙан ҡаршыға бик ябай, әммә бөхтә кейенгән бер ҡатын килә. Ҡулында вак-төйәк әйбер һалып йөрөтә торған сетка, унда ниндәйҙер төргәктәр. Ныҡ үҙгәргәйне ул: ябыҡкан, йөҙөндә ҡартлыҡ һыҙаттары... Әммә күҙҙәре, уларҙың ниндәйҙер эске нур менән балҡыуы, йылмайыуы... Уларҙы башка күҙҙәр менән бутау, танымау мөмкин түгел ине!"

Романды оҡшаталар, хуплайҙар, әммә донъяға күрһәтергә ашыҡмайҙар. Яҙмыш әҙибәне йәнә ауыр һынауға дусар итә. Был юлы ла ул кешелек дәрәжәһенә тамсы ла тап төшөрмәй, тыйнаҡ ғорурлығын түбәнһетмәй алып ҡала.

Яҙыусының рухи бейеклеген күҙаллау өсөн авторҙың эске тауышына ҡолаҡ һалайыҡ. Ул ышаныслы, тыныс һәм бәҫле. Оло талант эйәһе, ныҡ зауыҡлы уҡыусы буларак, Һәҙиә, әлбиттә, үҙенең кеше яратып уҡырлыҡ юғары кимәлдәге әҫәр яҙғанын яҡшы аңлай һәм уның өсөн басалкы, тыйнак, әммә үҙ баһаһын белеп көрәшә. Ризаһыҙлыҡ күрһәтмәй, ҙур түҙемлелек менән, тәнҡит һүҙҙәрен һәм иҫкәрмәләрҙе иғтибарға алып, әммә кәрәк ерендә үҙенең ҡарашын яҡлап, арымай-талмай төҙәтә.

Кирбес ҡалынлығындай ҙур романдың алты вариантын эшләй. Сәләмәтлегенең көнләп түгел, СӘҒӘТЛӘП насарайыуын айырым-асыҡ тойған кешенең ғорур сабырлығына хайран ҡалырлыҡ. 1944 йылдың 9 ноябрендә уҡ Фатима Юлтыеваға хатында: "ҡан-фәлән булһа, төкөрәм дә, иғтибар итмәй йөрөй бирәм", — тип яҙған кешенең үпкәһе ун ике йылдан һуңниндәй хәлдә булғанын күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел.

1954 йылдың 22 ғинуарында Яҙыусылар союзына һуңғы хатында ул: "Шул хәтлек көс һалынған, беҙҙең совет әҙәбиәте өсөн шул хәтлем кәрәкле булған был китаптың әле булһа донъяға сыға алмауы маҡтаулы эш түгел. Башҡорт ярлыһы синфи көрәштә лә "йәлләмәгән йәнен, түккән ҡанын", быны йәштәргә күрһәтмәү— ҙур гонаһ буласаҡ" , — тип яҙған.

Хаттың һәр һүҙе уйланылған, тотанаҡлы, тыныс, шул уҡ ваҡытта аҡыллы, талапсан. Үҙ хәленә, һаулығына тамсы ла ишара, мәрхәмәт һорау, йәлләтеү хисе уятырға тырышыу ғына түгел, күңел тарлығына үпкә йәки рәнйеү ишараты ла юҡ. Үҙен һәм талантын ихтирам иткән һәм уның баһаһын анығ белгән, юғары рухлы, һәр яҡтан өлгөргән, тормошто ла, кешеләрҙе лә бөтөн тәрәнлегендә, аяуһыҙлығында аңлап та, донъянан һәм бәндә балаларынан төңөлмәгән зирәк кешенең аҡыллы сабырлығы. "Үҙемде тик бәхетле кешеләрҙән һанайым. Выжданымды бер ваҡытта ла ташлағаным юҡ. Биографияма бысраҡ яҡтылар — йоҡманы. Шуға күрә теге донъяға барып Островский мәрхүм менән осрашһам, шул ярай", - тип яҙған ул көндәлегендә.

Тәнде ҡайғыртып йәненә хилафлыҡ ҡылмаған, йәнен һаҡлайым тип рухына хыянат итмәгән һәм шуның ҡиммәтен аңлаған ҡаһарман шәхес бер нәмәгә ҡарамай, ғүмеренең аҙағына тиклем тормоштан, кешеләрҙән, йәшәүҙең үҙенән һәм ижадтан йәм табып йәшәгән. Замандаштарының хәтерләүенсә, Һәҙиә Дәүләтшина һуңғы һулышына тиклем көләс һәм яғымлы ҡалған. Көслө шәхестәр үҙ баһаһын белә, эшләгән эштәренең ҡиммәтен самалай, ә Һәҙиә Дәүләтшина кеүек оптимистик рухлылар киләсәктең матурлығына шикләнмәй һәм халҡына ышана. Ул үҙенең ғүмерлек ижад емешен бөйөклөктөң баһаһын белгән саф күңелле халҡына ҡалдырғанын, әлбиттә, яҡшы аңлаған.

"Талантлы яҙылган әҫәрҙәрҙең дә төрлөһө була. Берәүҙәр элекке яҙылғандарҙы кеүәтләй, икенселәре яңы йөкмәтке ала, әммә художестволы яңылыҡ дәрәжәһенә күтәрелмәй әле, ә бына өсөнсөләре инде ысын мәғәнәһендә асыш була. Улар быға са тыуҙырылған ҡаҙаныштарҙы нығыта. "Ырғыҙ" романы ана шундай әҫәр булды", — тип баһалай ғалим һәм тәнҡитсе Әнүр Вахитов иң беренселәрҙән Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булған был романды.

Выждан, күңел паклығы һәм ижад ҡомары Һәҙиә Дәүләтшина өсөн рухи азатлыҡ сығанағына әүерелгән, уның күркәм шәхесен ерҙәге тамуҡтың ғазаптарынан үҙгәрешһеҙ алып сығырға ярҙам иткән һәм кешелектең рух ҡаһармандары юғарылығына күтәргән.

**// Ватандаш. – 2005. - № 3. – 3-14- б.**

**Рәшит Шәкүр**

## Һомайғош

*Әле генә бөтә тарафтарҙан кар һалкынлығы бөркөлгән ерҙә умырзая калка... Бар донъяға йәшәүҙең ни тиклем гүзәл икәнлеген раҫлау өлөшө ото бәләкәй генә зәңгәр умырзаяға төшә. Яҙмышының боҙ катлауы кеүек өшөткөс мәлдәрендә лә сәскәләй балкыған Һәҙиә Дәүләтшина... Күңел нуры моңһоу күҙҙәрендә тыйнак балкыған талантлы, сибәр, каһарман катын... Мартта уның тыуыуына 100 йыл тулды ...*

Һәҙиә Лотфулла кыҙы Дәүләтшина 1905 йылдың 5 мартында (иҫке стиль менән - 21 февралендә) Һамар губернаһы Николай өйәҙе Имел улусының (хәҙерге Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы) Хәсән ауылында ярлы крәҫтиән Лотфулла Ильясов ғаиләһендә тыуған. Һәҙиә зирәк акыллы һәм теремек бала булып үҫә. Үҙенең бала ҫағын хәтерләгәндә, яҙыусы бәләкәйҙән өләсәһенең тылсымлы әкиәттәрен йотлоғоп тыңлауын айырыуса йылы хистәр менән иҫкә ала. "Ана әле миңә ете-һигеҙ йәш, - тип яҙа Һәҙиә Дәүләтшина "Бәхет кошо" тигән әҫәрендә,мин йыш кына әсәйемдең әсәһе -картәсәйем янына барып йөрөйөм. Ул үҙенең түкалак балсык өйөндә һука башы кешеләргә ямау ямап, тамак туйҙырырлык эш эшләй... Уның ун биш йәштән бирелгән ирен, баяр имениеһына төшкән өсөн, әллә ни тиклем иптәштәре менән Себергә оҙаткандар. Унан һуң уны өсөнсө бисәлеккә биргәндәр. Уның унда кағынды-һуғындыла ғүмере үткән. Бына ул карсык, яр башында япрағын койоп яңғыҙ ултырған карт өйәңке һымак, бер үҙе зарланып йәшәй..." Бына ошо яңғыҙ калған зарлы карсык ейәненә бәхет кошо Һомай тураһында таң калдырырлык якты хыялдар менән һуғарылған тылсымлы әкиәт һөйләй. "Һауала, күктең иң бейегендә, нисәмә мең йылдарҙан бирле Һомай кош тигән бер бәхет кошо йәшәй икән, ти. Ул донъяла бер генә кош та осоп менә алмаҫлык бейектә оса икән. Уны бер генә кеше лә үҙ күҙе менән күрә алмай икән... Бына шул коштоң үҙен түгел, күләгәһен генә ерҙә күреп калған кеше лә сикһеҙ бәхетле булып йәшәй ти ҙә баһа". Кескәй Һәҙиә лә, әлбиттә, бәхет кошо тураһында хыяллана. "Уны күргем, себешен тотоп яраткым килә, бик бәхетле булғым, картәсәйемде лә бик бәхетле, кайғыһыҙ иткем килә",- ти ул.

Илаһи бәхет кошо хакындағы хыялдар буласак яҙыусының донъяға карашына, уй-тойғоларына өр-яңы йүнәлеш бирә, уның күңелендә изгелек саткыларын токандыра, якын кешеләренә карата ярҙамсыл, мәрхәмәтле булыу теләген тыуҙыра. Әйтергә кәрәк, Һәҙиә Дәүләтшина үҙенең был сифаттарына ғүмер буйы тоғро булып кала. Шуға күрә лә замандаштары уны, оло рухлы, ҙур талантлы яҙыусы булыу менән бергә, мөләйем, алсак йөҙлө, сабыр, тыйнак, тыныс тәбиғәтле, һылыуҙан һылыу башкорт катыны итеп хәтерләйҙәр.

Һәҙиә Дәүләтшина башта ауылдағы кыҙҙар мәҙрәсәһендә укый, ә инде Хәсән ауылының Янғол исемле байы балаларын укытыу өсөн каланан мөғәллимә алдырткас, уның янына йөрөп, дәрестәр ала. Октябрь революцияһынан һуң ауылда асылған яңы мәктәптә укыуын дауам итә. Ошо осорҙа ул яҙма әҙәбиәт өлгөләре менән таныша, "Таһир-Зөһрә", "Буҙъегет" һымак төрки телендәге боронғо дастандарҙы, Ғ.Тукай, М.Ғафури шиғырҙарын мауығып укый.

1919 йылда атаһы Лотфулла ағай тиф ауырыуынан донъя куя. Әсәһе Гөлйәүһәр апай, Һәҙиәнән тыш, тағы ла өс бала менән ярҙамсыһыҙ тороп кала. "Мин, арала иң өлкәне һәм ул вакытта мәктәптең 1-се баҫкысын тамамлаусы буларак, ғаиләнең башлығы һәм караусыһы булырға тейеш инем",- тип яҙа ул аҙак. 1920 йылда, ун биш кенә йәшлек үҫмер көйөнсә, ошо ук Ырғыҙ буйындағы Диңгеҙбай ауылына укытыусы итеп ебәрелә. 1921 йылдың аҙағында, был төбәктә актарҙың хәрәкәте көсәйеп китеү сәбәпле, урындағы совет органдарының тәкдиме менән

Һәҙиә, Һамар калаһына китеп, башҡорт-татар педагогия техникумына уҡырға керә. Тиҙҙән, 1922 йылда, партия хеҙмәткәре, буласаҡ яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшинға кейәүгә сыға. Ғөбәй Дәүләтшинды Мәскәүгә, ә 1923 йылдың көҙөндә Өфөгә күсерәләр. Шул ваҡыттан башлап Дәүләтшиндар ғаиләһе 1937 йылда аяуһыҙ репрессия ҡорбанына әйләнгәнгә тиклем Өфөлә, 1933-1935 йылдарҙа Баймаҡ районының БАССР-ҙың Х йыллығы исемендәге (хәҙерге Йылайыр) совхозында йәшәй. Ғөбәй Дәүләтшин, күп кенә юғары вазифалар, шул иҫәптән республиканың мәғариф министры бурысын атҡарып, ҙур дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре һәм бер үк ваҡытта башҡорт телен камил белгән талантлы яҙыусы булып танылa. Һәҙиә Дәүләтшина өсөн Өфөгә килеү бөтәһенән бигерәк башҡорт әҙәбиәте менән яҡындан танышыу, Д.Юлтый, А.Таһиров, М.Ғафури, Т.Йәнәби, Б.Ишемғол кеүек әҙиптәр менән аралашыу йәһәтенән ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Ошо осорҙа ул, һаулығы насарайыуға ҡарамаҫтан, белем алыуын дауам итә: 1924-1925 йылдарҙа педагогия институты рабфагында уҡый, 1935 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына кереп, уның ике курсын бик яҡшы билдәләр менән тамамлай. 1936 йылда талибә Һәҙиә Дәүләтшина Өфө калаһы Ленин район Советына депутат, Советтарҙың ғәҙәттән тыш Х Бөтөн Башҡортостан съезына делегат итеп һайлана. Иң мөһиме, ул үҙенең белемен арттырыу өҫтөндә әҙмә-әҙле һәм ныҡышмалы эшләй, урыҫ һәм классик әҙәбиәтте уҡый, ижад серҙәренә төшөнөргә, әҙәби оҫталыкка өйрәнергә ынтыла, илһамланыл яңынан-яңы әҫәрҙәр яҙа. 1934 йылда Һәҙиә Дәүләтшина башҡорт яҙыусылары делегацияһы составында совет яҙыусыларының I съезында ҡатнаша, унан ҙур рухи күтәренкелек һәм дәрт менән ҡайта. "Ялҡынлы йылдар" әҫәре иһә, артабан яҙыусының атаклы "Ырғыҙ" романы буларак, киң эпик полотно менән үҫтерелә. Был хакта Һәҙиә Дәүләтшина үҙе 1939 йылдың декабрендә: "Октябрҙең ХХ йыллығына "Ялҡынлы йылдар" исемле роман әҙерләнем",- тип яҙа. Әммә, үкенескә ҡаршы, нәҡ ана шул Октябрҙең ХХ йыллығын башҡорт халҡының бик күп аҫыл заттарына ҡара ҡайғылар эсендә каршы алырға тура килде. 1937 йылдың 20 ноябрендә яҙыусыны, йәнәһе, Ватанға хыянат итеүсенең ғаилә ағзаһы тип ғәйепләп, кулға алалар һәм НКВД айырым кәңәшмәһе тарафынан биш йылға иркенән мәхрүм итәләр. (Бынан бер нисә ай элек Ғөбәй Дәүләтшин кулға алынған була. 1938 йылда ул нахакка үлем язаһына хөкөм ителә һәм атып үлтерелә.) Әҙибә 1942 йылдың октябренә тиклем Мордовияның Темников лагерҙарында ултырып сыға. Башҡортостанға ҡайтҡас, яҙыусы башта Өфөлә ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтына төнгө ҡарауылсы булып урынлаша. Ошо ваҡытта ул 1937 йылда кулға алыныу аркаһында бүленеп ҡалған романы өҫтөндә эшен дауам итә. Яҙыусы ижад өсөн, ғәҙәттә, ҡарауылда үткәргән төнгө сәғәттәрен файҙалана. Әммә, Өфөлә йәшәргә рөхсәт ителмәгәнлектән, уға Бөрө калаһына күсеп китергә тура килә. Артабанғы тормошо ошо Бөрө ҡалаһы һәм бер аҙ ваҡыт Силәбе өлкәһендәге Һилиә (Сулея) станцияһы менән бәйле була. 1942-1952 йылдарҙа яҙыусы, һаулығының көндән-көн ҡаҡшай барыуына ҡарамаҫтан, актык көсөн биреп, "Ырғыҙ буйҙарында" романының бер нисә вариантын яҙа. Ниһайәт, төрмәлә, лагерҙа заяға үткәргән биш йыл ғүмерҙе иҫәпләмәгәндә лә, 15 йылға һуҙылған был бөйөк хеҙмәт - хәҙер ул "Ырғыҙ" тип атала - тамамлана. Ләкин, Башҡортостан Яҙыусылар союзының, ул сактағы "Әҙәби Башҡортостан" журналының ишек тупһаларын күпме генә тапаһа ла, өлкән вазифалы әҙәбиәт чиновниктарына инәлеп-ялбарып мөрәжәғәт итһә лә, бөйөк әҙибәгә үҙенең иң ҡәҙерле әҫәренең һис юғы бер генә булегенең дә баҫылып сыкҡанын күрергә насип булмай. Һәҙиә Дәүләтшина 1954 йылдың 5 декабрендә, 50-се йәшендә, Бөрө ҡалаһында үпкә ауырыуынан вафат булды. "Ырғыҙ" романын нәшер итеүгә

унның рухи ҡорҙашы, яҡташы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти әҙерләне. Әҫәр тәү башлап 1957 йылда донъя күрҙе, артабан ул тиҙ арала рус теленә, шулай уҡ башҡа телдәргә тәржемә ителде, башҡорт яҙыусыларының иң яратҡан әҫәренә әйләнде, бөтөн ил күләмендә киң танылыу яуланы. Ә 1967 йылда Һәҙиә Дәүләтшинаға "Ырғыҙ" романы өсөн (үлгәндән һуң) Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелде.

Һәҙиә Дәүләтшина тураһындағы иҫтәлектәрҙең береһендә мәшһүр яҙыусының ошондай һүҙҙәре килтерелә: "Мине яҡшыраҡ белгегеҙ килһә, "Ырғыҙ" романымды уҡығыҙ. Минең бөтөн йәнем, саф йөрәгем шул романда",- ти торғайны Һәҙиә апай. Эйе, башҡорт халҡының изге һәм саф күңелле, ҡаһарман йөрәкле ҡыҙы, ысын-ысынында халыҡ яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшинаның йәне лә, йөрәк тибеше лә – унның һоҡланғыс әҫәрҙәрендә, халыҡ тормошонон һәм яҙмышының икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрен айҡаған илһамлы "Ырғыҙ" романында.



***Һүрәттә:*** *ултыра, һулдан* ***беренсе — Һәҙиә Дәүләтшина.***

**// Башҡортостан ҡыҙы. – 2005. - № 3. – 20 -21-б.**

**Кәтибә Кинйәбулатова**

## ОНОТА АЛМАМ УНЫ МӘҢГЕГӘ

Туған халҡы бәхете өсөн көрәшкән ҡәҙерле яҙыусы ағайҙарыбыҙ - Дауыт Юлтый, Төхвәт Йәнәби, Ғабдулла Амантай... Һәҙиә Дәүләтшина апайҙарҙың аҡ намыҫы бөгөн тантана итә. Был бөйөк шәхестәр үҙҙәренең яҙмыштары менән киләсәк быуынды ялған-ялағайҙарҙан, мәкер-юхаларҙан һаҡ булырға киҫәтәләр, үткәндәрҙән фәһем алырға өйрәтәләр.

1952 йылдың көҙөндә мин Силәбе өлкәһе Аргаяш районы Мөхәмәтколой мәктәбен ҡалдырып, Өфөгә күсеп килдем. Өфө мине бала сағымдан шиғриәт донъяһы менән һәр ваҡыт үҙенә тартты. Үҫмер саҡтарым (педрабфак, techпединститут йылдары) бында үтте. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, уҡыуҙы өҙөп, тыуған яҡтарыма ҡайтырға тура килгәйне. Өй тулы етем бала. Атайымды 1938 йылдың мартында Уразбай ауылы мәктәбендә уҡытып йөрөгән еренән, ҡулына бығау һалып, "халыҡ дошманы" яманаты тағып, ҡулға алдылар. Уҡыу-уҡытыу әсбаптарын, өйҙәге китапханабыҙҙы быран-заран килтереп, ҡайһы китаптарҙы үҙҙәренә алып, туҙҙырып бөттөләр. Шул уҡ йылды иң алдынғы уҡытыусыларҙан Ялтыр ауылынан Һаҙый Шаимов, Ҡуянбайҙан Ҡунаҡкилде ағайҙар ҙа ҡулға алынған. Мин был фажиғәле көндәрҙә Өфөлә уҡып йөрөп, күрмәй ҡалдым. Ауыл халҡы һүҙынан милиция начальнигының: "Өс йондоҙҙо" алдыҡ, инде Арғаяш аръяғынан сүпләйек, тип, эреләнеп, эсеп, ҡунаҡ булыуҙарын сирканып һөйләнеләр. Ул заманда шымсылыкта оҫта, беҙҙең яҡҡа килеп төпләнгән Һөйөндөков, Байбурин, Йәнғуразовтар төбәктең күҙгә күренгән аҫаба башҡорттарын актив "сүпләштеләр".

Ватан һуғышы башланғас, атайым һымаҡ, Арғаяш районы Әлшәй ауыл советы Табын ауылы мәктәбендә укытыусы булып эшләй башланым. Институтты ситтән тороп тамамларға ҡалдырҙым. Бер йылдан һуң Мөхәмәтколой урта мәктәбенә күсерҙеләр. Атайым һымаҡ, ауылда алһыҙ-ялһыҙ эшләйем. Шулай итеп, тиҫтә йыл үтеп тә китте. Кем ышаныр, әле генә йәшлек ҡанаттарын ҡағып тигәндәй, осоп-төшөп йөрөгән мине мәктәптә эшләүҙән тыйырҙар, тип. Был миңә, ғаиләмә бик яман трагедия булды. Етмәһә, 1952 йылдың көҙөндә беҙҙең өйөбөҙгә тағы ла ҡара ҡайғы килде - инәйем донъя ҡуйҙы. Ниндәй ауырлыктар килгәндә лә беҙгә бер тамсы күҙ йәшен күрһәтмәгән инәйемдең *55* йәшендә генә, йырлы, моңло көйө ҡапыл ғүмере өҙөлөүе бөтә күңелемде шаңҡытты.

Өфөгә килеүен килдем дә, туғандарым ауылда ҡалды. Ҡулымда бер балам.Һуғыштан һуңғы ҡытлыҡ заманы булыуға ҡарамаҫтан, төрлө яҙмыштарҙан һуң иҫән-һау калған яҙыусы ағайҙар килеүемә бер ҙә гәжәпләнмәнеләр. Киреһенсә, хупланылар ғына. Шунда ук "Әҙәби Башҡортостан" журналы редакцияһына әҙәби сотрудник итеп алдылар.

1953 йылдың ҡояшлы матур йәйге бер көнө. Редакция ишеген әкрен генә асып, мөләйем йөҙлө бер апай килеп инде. Ул миңә күптән таныш һымаҡ тойолдо. Ҡулына бәләкәйерәк сумкаһын ҡуша тотҡан, өҫтөндә акһыл-зәңгәрһыу биҙәкле ситса күлдәк, күлдәк өҫтөнән уңғанырак йәшкелт еп кофта кейгән. Тулкынланып артҡа яткан ҡуңыр сәсе киң бейек маңлайлы йөҙөнә наҙлы горурлыҡ биреп тора. Асыҡ нурлы ҡара-һоро күҙҙәре уйсан-яғымлы, аяғына шымарып бөткән күк туфли кейгән. Бүлмәгә инеү менән ул минең янымда туктап, сәләм бирҙе. Барыбыҙҙы ла байкап сыкты ла: "Һеҙҙе лә күрер көнөм бар икән..." - тип йылмайҙы. Бөтә торошо, тауышы үтә яҡын, үҙе бик арыған, йонсоған, мин уны күреү менән: "Айбикә! Айбикә апай!" - тип ҡысҡырып ебәргәнемдә һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ошо мәл Һәҙиә апай әллә нишләне - ул бер кулы менән минең өстәл ситенә таянды, икенсеһен күкрәгенә ҡуйҙы. Мин, тиҙ генә урынымдан тороп, түрҙә, тәҙрә янында теҙелгән ултырғыстарға барып ултырырга ярҙамлашайыммы әллә тигәндә, Һәҙиә апай ҡапыл миңә бөтөнләй иғтибар итмәй, үҙе елтәнләп, шәп-шәп атлап Әкрәм ағайға ынтылды. Ә Әкрәм ағай ғәҙәтенсә сабыр ғына: "Һәҙиә, Һәҙиә Дәүләтшина бит ул", - тип асыҡ йылмайып, ҡулын һуҙҙы.

Мин нык уңайһыҙландым, бер Әкрәм ағайға, бер Һәҙиә апайға ҡарайым. Һәҙиә апай иһә минең уңайһыҙ ҡалыуымды һиҙеп алып: "Аптырама, һеңлем, "Айбикә" тиеүең миңә бигерәк тә окшаны, рәхмәт инде, минең әҫәремде онотмағаның өсөн, - тип ихлас йылмайҙы, тулкынланыуҙан тиҙ-тиҙ генә сумкаһынан ап-ак йоҡа ғына кулъяулығын сығарып йөҙен тотош ҡапланы ла күҙҙәрен һөрттө. Бер аҙ тынып торғаҫ: - "Айбикә" тиеүеңә йөрәгем тупылдап киттесе..." - тине. Шунда мин Һәҙиә Дәүләтшинаның үҙе тыуҙырған геройы үҙенә ни тиклем ҡәҙерле, ғәҙәти булмаған кисерештәр аша тыуған образ икәненә, изгеләрҙән-изге ғүмер киҫәге икәненә инандым. Ул әҫәрҙе еңел генә ижад итмәгән, ҡан һауҙырған хистәр-уйҙар емеше буларак, тере ысын шәхес итеп күреүе икән. Был тиклем болоҡһоуының тағы ла бер сәбәбе - байтак йылдар әҙәби тормоштан айырылып йәшәүенән һуң да үҙ булмышын кайтанан ишетеүе, үҙен юғалмаған итеп тойоуылыр ҙа.

Һәҙиә апай менән Әкрәм ағай хәл-әхүәл һорашып алғас, бик етди мәсьәләгә күстеләр. Һүҙ "Ырғыҙ" романы тураһында барҙы. Байтак һөйләшкәндән һуң, Әкрәм ағай, кулъяҙманы проза секцияһына ҡуйып тикшерергә кәрәклеген әйтте: "Сөнки, - тине ул, - үҙеңә мәғлүм, секция һүҙе кәрәк бит. Әлбиттә, үҙең дә ҡатнашырһың, Һәҙиә". Шунан Һәҙиә апайҙың: "Романдан бер-ике өҙөк биреп тә алырһығыҙ бәлки", — тиеүенә:

- Уныһы тураһында секция нимә әйтер, мин бер үҙем ни хәл итә алам хәҙер генә...

Үҙең белеп тораһың бит, - тип мәғәнәле генә әйтеп куйҙы. Дөрөҫ, Һәҙиә Дәүләтшина хөкөм мөҙҙәтен тултырып кайткас, "халык дошманы" тигән исем унан әлегә алып ташланмағайны. Һәҙиә апайҙы нык белһәләр ҙә, яуаплылыктан курккандарҙыр... Нишләтәһең, бер нисек тә аңлашмаҕас, һүҙ оҙайтыуҙан мәғәнә тапманылар. Һәҙиә апай кайтыу яғын караны. Төйөнсәктәрен алып ул минең янда туктай бирҙе лә: "Һеңлем, мине оҙата сыкмаҫһыңмы?" — тип, миңә йылмайып төбәлде. Мин, ул әйтмәһә лә, оҙатып сығырға уйлағайным. Әкрәм ағайҙан: "Мин Һәҙиә апайҙы оҙатып киләйем?" - тип һораным. Әкрәм ағай баш какты. Үҙемдең өҫтәл янында, иҙәндә, үҙ көнөн үҙе күреп, шым ғына беҙҙе күҙәтеп ултырған Рамазан улым ялт итеп тороп, ишек төбөнә барып та баҫты. Уны башта абайламаған Һәҙиә апай йөҙөн балкытып көлөп ебәрҙе: "Мин, - тине, - баланы күрмәй ҙә торам, иҫәнләшмәнем дә уның менән". Үҙә кинәнеп, тиҙ генә ишекте аса башланы. Сыккас: "Ситлектән ыскынған бөркөт балаһымы ни", - тип, улымдың яурынынан тупылдатып һөйөп тә алды. Эшкә бала эйәртеп йөрөү ауыр эш, әлбиттә. Ул сакта минең һымак "кара мөһөрлө" кешегә балалар баксаһы тураһында уйларға ла мөмкин түгел ине...

Әкрәм Вәли редакторлыктан бушатылды. Журнал таралмай, тиражы ни бары 3000 данаға ғына калды. Идара ултырышы мөхәррирҙең "үҙ теләге" менән эштән китеүе тураһындағы ғаризаһын карарға тейеш булды һәм байтак тәнкит һүҙҙәре әйтелде: ғалимдар, төрлө профессия кешеләре йәлеп ителмәй, заказдар ойошторолмай, журналдың авторҙары бер үк, рубрикаһы тар, материалдар осраклы ғына урынлаштырыла, публицистика, ижтимағи темалар көсһөҙ, осраклы ғына. Кем нимә килтерә - шуны ғына биреп тынысланыла. Журналды һис шикһеҙ йәнләндерергә кәрәк. Һуңынан бик кәтғи карарға килеп, былай тинеләр: "Мөхәррир йәшерәк, етеҙерәк эш итеүсе, ойоштороусы булырға тейеш. Ә Әкрәм Вәли талапсан яҙыусы, ул үҙ ижады өҫтөндә нығырак эшләһен. Беҙ уға ла, журналға ла якшылык теләйбеҙ". Был йыйылышта идара, редколлегия ағзаларына ла тәнкит һүҙе әйтелде. Кемдең кем булыуына карамаҫан, теге йәки был һандарҙа йомшак әҫәрҙең дә китеүе иҫкәртелде. Шуныһы ғәжәп, береһен береһе кәмһетмәй, шаулашып, кыҙыу-кыҙыу фекер алышып, һүҙ көрәштерһәләр ҙә, үпкәләш-ни юк.

...Беҙ редакциянан Совет урамына килеп сыктык. Тышта көн сыуак, елһеҙ, матур. Һәр кем үҙен иркен тоя, балаға уғата рәхәт, ул бер алға, бер артка сығып, һикереп-һикереп ала. Уның аяғындағы резина ботыйҙы күреп, Һәҙиә апай: "Бынау эҫе асфальтта уға "резинка" кейҙереп йөрөтмәҫкә ине. Көн буйы шундай аяк кейеме ялкыталыр, зарарлы ла бит", - тип уфтанып, миңә караны. "Уға яраклы сандалие лә юк шул, иҫкеһен юғалтты", тинем. Без Луначарский баксаһына киттек. "Мин шул тиклем яратам был баксаны, ағайың да ярата ине...", - тип ниҙер иҫләй генә башлағайны, беҙҙең алдан ук бакса капкаһына йүгереп инеп киткән әлеге балаға карап, миңә боролдо ла: ""Кара әле, ниндәй һәйбәт булды, көн оҙонона тәмәке төтөнөндә йонсоп ултырған балаға түгел, беҙгә лә ауыр бит ул редакция һауаһы", - тине. Шунан ул, ысынлап та, беҙҙе кайғыртырға күсеп китте. Минең кайҙа, нисек йәшәүемде ныкышып һорашты, уфтанды, борсолоуы хатта йөҙөнә сыккайны. Эйе, тәү кат күрешеп һөйләшкәндә лә бит уның: "Минең һымак итмәһәләр ярар ине һине лә..." тиеүен мин акылға һалып аңламағайным, аҙак тәрән мәғәнәле һүҙҙәренән сығып, күреп танышып һөйләшеүҙә нисек аңланы икән, шул тиклем дә әүлиә микән ни, тип уйландым. Ошо вакыттан Һәҙиә Дәүләтшина минең өсөн донъяла иң якын туғандарымдың береһенә әйләнде. Әлегә тиклем мин уны нисек белмәй йәшәгәнмен, нисек ғүмер иткәнмен? Әгәр белһәм, алдарак күрһәм, был тиклем дә ауырлыктарҙы кисермәҫ инем һымак булып китте. Юк, мин уны бик ҙур яҙыусы итеп тә түгел, ә бәлки, үтә кешелекле, миһырбанлы, оло йөрәкле әсәй, инәй һымак булғаны өсөн нык үҙ иттем, яраттым, инде бер вакытта ла айырылмаҫ дуҫым иттем.

Бына ул үҙенең Бөрө калаһында нисек йәшәүен, ағайҙың (иренең) һәйбәт кеше булыуын кыуанып һөйләй. "Йәшәргә мөмкин, бына тик романдың ғына донъяға сығыуын көтәм, барыбер донъя күрер ул", - тип, туктап миңә карай. Ә мин, иҫәүән, әллә ни йыуата алмайым инде. Ҡулдан киләме ни?! Икебеҙ ҙә атылған аккош балалары ишебеҙ. Был көн бакса беҙгә тик бәхет кенә теләне һымак, ағастар йәм-йәшел, аллы-кызыллы сәскәләр тик беҙҙең өсөн генә үҫкән, сәскә аткан кеүек. Ысынлап шулай булғандыр ҙа. Ышандым мин шуға, әлеге көнемдә лә ышанып йәшәйем. Ниңә? Һәҙиә апай менән бергә үткәргән минуттарым теп-тере йәшәй һәм күңелемдә мәңгегә йәшәйәсәк.

Һәҙиә апай мине Бөрөгә бер нисә кат шылтыратып сакырҙы. "Бер генә көнгә булһа ла кил, Кәтибә", - тигән ялынысլы тауышы һаман колағым төбөндә яңғырай. Ошо баксала һөйләшеп йөрөгән көндәрҙән һуң аҙна-ун көн үткәс, Һәҙиә апай Өфөгә тағы юлыкты. Редакцияға ке-реп, мөхәррирҙән: "Кәтибәне беҙгә ике генә көнгә ебәрһәгеҙ ине, алып кайтыр ҙа, теге дүшәмбегә сәғәте-минутына килтереп еткерер инек. Әле Сафиндың грузовигын шалтор-шолтор иттереп алып килгәйнем. Сафин бергә йәшәгән йәмәғәт", - тип көлгән булды. Юк, Әкрәм Вәли ризалык бирмәне. Эй, ул сактагы "тимер" тәртиптәр! Әкрәм ағай: "Әле номер әҙерләйбеҙ, артык, төпсөнөп укыр сотрудниктарым юк, күреп тораһығыҙ. Сөндөклөнө әйтеп тә тормайым, корректураны ла, кулъяҙманы ла укымай ул, хәйер... ултырмай ҙа төштән һуң, - ти. - Хаталар күп китә, бәлки, һуңғарак мөмкин булыр".

Мине Һәҙиә Дәүләтшинаға ебәрмәүенең төп сәбәбе журнал мәшәкәттәре генә булмағандыр, бөтөнләй икенселер... Хәҙер генә мин үҙемсә фараз итәм: әйтәйек, Һәҙиә апай үҙенә тәғәйен 5 йыл мөҙҙәтен теүәл, намыҫлы хеҙмәт күрһәтеп, үтәп кайтһа ла, бөтөнләй әле акланмаған, яҙыусы исеме лә кайтарылмаған.

Шуныһы кыҙғаныс, оло яҙыусы мине буштан-бушка, күңел асып ултырыу өсөн генә сакырмағандыр. Ул төрмәлә (элекке яҙыуҙарын да) кулъяҙмаларын караштырырға, бергәләп укып-кәңәшләшергә, йыйнаклаштырырға, эйе, хатта минең менән генә булһа ла, бик теләгәйне.

— Ғәрәпсә укый беләһеңме, Кәтибә? — тип һораны ул минән. - Мин романымдың кайһы бер главаларын ғәрәпсәләп яҙып ташланым, шулай итһәң, кағыҙ аҙ китә, урынды ла, вакытты ла аҙ ала... "Тегендә", эш өҫтөндә нормамды тиҙ генә тултырам да, кешеләр ялға тукталған арала, алданырак вакыт табып, башыма килгән бер-ике абзац "кунактарҙы" (фекерҙәрен шулай ти торгайны) кағыҙға төшөреп тә куям. Шунан уны киң итеп тегеп алған билбауым аҫтына кыҫтырам. Бер кем дә минең "урлашканды" белмәй ҙә, күрмәй ҙә, тел-тешкә эләкке килмәй...

Мин уға: «Ғәрәпсә беләм, тик яңысаһын», — тинем. Ул да: "Мин дә шулай инде. Ҡалай шәп, укый белгәс. — Үҙе кыуана. — Барыбер бер яйы табылыр әле..." — тип өмөтләнде.

Һуңырак бер килеүендә редакцияла: "Роман проза секцияһында каралды бит инде. Әкрәм туған, шул турала журналдың һуңғы битендәге белешмәләрҙә минең дә исемемде кыҫтырһағыҙ, "Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романын яҙып ташланы, секцияла тикшерелде", - тип, Әкрәмдән үтенде. - Үҙегеҙ ишеттегеҙ бит, секцияла Рәшит (Ниғмәти) романдан бер-ике глава әҙерләп бирәм, урынлаштырайык, тине бит". Ә Әкрәм ағай уға каршы: "Эйе, тикшерелеүен тикшерелде лә ул, Һәҙиә, "Ырғыҙ" романы тикшерелде" тип кенә әйтеп китеүгә һин мохтажмы инде", — тип, уфтанып куйҙы. Шулай тиһә лә, Һәҙиә апай ныкышыбырак фекерен кеүәтләне: "Эй, Әкрәм, укыусылар минең дә нимәлер өҫтөндә эшәүемде, әле барлығымды белеп торһон ине, тим, — ти. Уның бер аҙ калтыранған тауышы шыбырлауға күсеп китте. — Исем-фамилиямды баҫмала үҙемдең дә күрәһем килә ине шул..." — тине лә сабый хөкөмөндә, хәлһеҙләнгәндәй, тынып калды. Был юлы ла апай бер һөҙөмтәһеҙ кайтып

китергә мәжбүр булды. Бына бит ул "тормош - ормош!" тигәндәре, кем кемдең алдында ялынып-ялбарып ултырырға мәжбүр итеүҙәре!

"Һәҙиә Дәүләтшина - Совет шәреғе ҡатын-ҡыҙҙары араһыннан сыҡкан беренсе талантлы романсы, оло ауырлыҡтарға осрауына ҡарамаҫтан, уның, халыҡ тормошо тураһында ҙур әҫәр тыуҙырыуы - ысын мәғәнәһендәге ижад батырлығы ул. Шуның менән яҙыусы үҙенә мәңгелек һәйкәл ҡойоп ҡалдырҙы. Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романын белмәй тороп, башҡорт халҡының ысынбарлығын аңлау мөмкин түгел", - тигәйне күренекле рус яҙыусыһы Леонид Соболев.

Һәҙиә Дәүләтшина, ошо бөйөк романдың авторы, үҙебеҙҙең түрәләргә ялынып ултыра бит инде. Ошо хәлендә лә ул: "Мин уның донъя күреүенә ышанам", - тип әйтеп бетмәгән кинәйәләрен генә аңлауы ауыр түгел. Ни тиклем оптимист һәм үҙенең художество һәләтенә ышанысы ҙур булған икәненә тағы һоҡланаһың. Ысынлап, уйлаһаң, Дәүләтшина кеше күңеленең инженеры ғына түгел, ә әүлиәһе.

Байтаҡ ваҡыт үткәс, больницаға ятмаҫ элек, "фатирға" Һәҙиә апай килеп инде. Мин иҫке Өфөнөң Усольск урамындағы иҫке йорттоң соланында йәшәгәнемде әйткәйнем. Уны күргәс, шатлығымдан һәм аптырауҙан ҡаушап ҡалдым. Ул арыған, йонсоған, ғәҙәтенсә, ҡулында сумкаһы, сеткаһы бар,  арҡаһына йоҡарак шәл һалған.

- Үҙең генәме, апай, нисек таптың? — тинем.

- Теге ваҡытта баҡсала үҙең биргән адресты әлдә юғалтмағанмын. Эйе, үҙем генә. Һиңә кем кәрәк тағы? — ти бөтә йөҙө менән йылмайып. Үҙе аяғында саҡ баҫып  тора. - Бына шул адресты йоҙроклап тоттом да, Фрунзе урамынан төшөп, йүгереп тигәндәй, сыҡтым да киттем. Эй атлайым, эй атлайым, килә-килә арыным, ҡапҡа төбөндә эскәмйәлә ултырып ял итеп алдым. Ә һин көтмәнеңдә ме? Мин ни, "пешком туратка" атландым да, "тып" итеп ҡалдым, - тип көлә, күкрәген тотоп сәсәп йүткереп тә ала үҙе. Бер туҡтамай ҡыуанысынан һөйләнә.

Урын күрһәтеп, хужалар булмауҙан файҙаланып, өйҙәге бер ҡойкаға урынлаштырҙым: "Ятып торсо, апай!" - тим. Үҙем тиҙ генә магазинға барып ҡайтырға уйлағайным.

- Автобуска ниңә ултырманың, бигерәк оҙаҡ килгәнһеңдер?" — тим өтәләнеп.

-Эй-й, - ти ул, - унда инерлек тә түгел ине шул, бер туҡталышта ҡарап тороп ҡалдым, машинаның ишеге лә ябылмаған көйө ҡуҙғалып китте. Алла һаҡлаһын, инһәм, себеште ҡыҫҡан тиклем дә булмаҫ, бер генә "серр" итеп ҡалыр инем. Үҙем киләм, үҙем ҡурҡам, ял көнө бит, берәй дуҫына китмәгәйе, тим.

Рамазан улым да яратып өлгөргән был яғымлы инәйҙе, унан күҙен дә алмай ҡарап тора. Һәҙиә апай уға кесәһенән алып ал-ҡыҙыл ҡағыҙлы оҙон кәләм-кәнфит тотторҙо. Уны арҡаһынан һөйөп яратты. Мине онотоп, бала менән генә һөйләшеп, әүрәп китте: "Мин һиңә, улым, ҡурып, тирмәндә ваҡ ҡына итеп тартылған бойҙай талҡанын килтерҙем. Беләһеңме талҡанды? Ул бик тәмле була, бешермәй генә һөткә болғап та ашап була. — Төйөнсөгөн уға һуҙып, — Мә, инәйеңә бир!" — ти. Ул арала мин самауыр ҡуйып ебәрҙем. Һәҙиә апай был көндө миндә ҡунды. Ҡайтырға көн кисләгәйне, әмәле лә, теләге лә юҡ ине. Бер аҙ ял иткәс, ни өсөн килеүенең сәбәбен әйтеп һалды:

- Мин романымдан өҙөк бирмәҫтәрме икән тип өмөт иткәйнем, булмаҫ ахыры хәҙергә. Әкрәм бер ҙә биреү яғында түгел. Рәшит әйтә лә бит... — тип үкһене. — Тағы бер һорап ҡарайым да, башҡа өндәшеп-ялынып тормамдыр. Был юлы мин Тел институтына ла кереп сығам. Тел мөхитен ҡайғыртмайҙар. Һуңғы баҫмаларҙы уҡып бараһыңдыр? Бигерәк ярлыландырабыҙ туған телебеҙҙе. Эсте бошора. Был һүҙ архаизм, беҙҙең башҡортҡа, һөйләшенә, йәнәһе, хас түгел һәм башҡалар тип хәбәр һалалар.

- Институтта тел мәсьәләһен күтәрмәксеһегеҙме? — тип һорап, һүҙен бүләм.

- Эйе, бына сумкамда үҙем Ырымбур, Куйбышев, хатта һеҙҙең, Урал артындағы һөйләш һүҙҙәрен, уларҙың халыҡсанлығына һоҡланып ҡына түгел, йәшәргә тейеш итеп танып, йыйып яҙып алғанмын. Биш йөҙ самаһы. Шуны тапшырырға тейешлемен, юҡһа, байлыҡ юҡҡа сыға, шул һүҙҙәрҙең береһе лә һүҙлектә юк. Һин дә шул һүҙҙәргә иғтибар итә йөрө, "яңы" һүҙҙәрҙе яҙып алып йөрө, йәме? — ти.

- Урал арты башҡорттарының һөйләштәре ҡаҙаҡ һүҙҙәренә тартым, улар әллә ҡаҙаҡтыҡы, әллә беҙҙеке инде, — тим. — Беҙҙең исемдәрҙе әйтәм, ҡаҙаҡтарҙы хәтерләтә лә баһа.

Ул: "Беләм мин ул яҡтарҙың һөйләшен, бик тә ҡыҙыҡһынғаным бар, - ти.- Ана, Бабич иркен эш иткән һүҙҙәрмән (минеңсә әйтеп ҡуя), рәхәтләнеп ижад иткән, ул бит был ярай, был ярамай тип тормаған, күңеле нисек йырлаған, шулай яҙған да ташлаған", — ти.

Алайым бер аҙҙан йоҡлап, сәй эсеп, ял итеп алғаç, өй алдына сығып ултырҙы ла, кескәй генә ҡыҙыҡай һамаҡлаған һымаҡ, Бабич шиғырҙарын яттан әйтеп алды. Унан мине саҡырып: "Бына ҡара әле, Бабичты, Тукайҙы ятлап интегергә түгел, уларҙың шиғырҙары үҙҙәре тел осонда әйтеләм генә тип тора. Күңелемә шулай еңел һеңгән улар, һине лә үҙе менән ҡушалай йырлата, илата, дәртләндерә, шатландыра... Онотолоп, бер-бер артлы шигыр һөйләгәндән һуң, ул урынынан ҡуҙғалырға булды. Иҙел яғынан һалҡынса ел иçә, шәле менән ҡымтынып, кире соланға инде. Мин дә уның менән эйәреп, күңелен табырға тырышып йөрөп ятам. Шул ваҡыт ул бер серен асып һалды. Мин ул саҡта сер итеп түгел, ә кәңәш йөҙөнән, уртаҡлашып әйтелә торған кәҙимге йомош кына итеп тыңлағанмын шул, үкенескә ҡаршы. Ҡайҙан ғына беләйем һуң, яҙыусылар бит минең өсөн барыһы ла иң изге кешеләр ине бит! Бер-береһенә хыянат, хөсөтлөк итеүҙәре бөтөнләй ят нәмә тип белгәнмен инде. Һәҙиә апай уйланып китеп, ҡапыл өндәшә ҡуйҙы:

- Кәтибә, минең тағы, - тип кеселекле иçкәртте, - ҙур ғына әçәрем бар, тик ул повестмы, романмы тип аталыр, бер атаҡлы ат ҡарағы тураһында... — тип миңә һораулы ла, һынаулы ла ҡарап тора. -Ҡараҡ ҡынамы, шәп егет ул. Һеҙҙең яҡтыҡы... - тип йылмая. - Мин уны "Айбикә"не яратҡан һымаҡ, яратып яҙыш ташланым. Тик әле бер нисә ҡат өçтөндә эшләрмен, ләкин хәҙергә  "әҙер"тип әйтерлек түгел.

Шул ваҡыт мин уны бүлдерәм:

- Сәләм ағай ҙа иç киткес ат ҡарағы аша ғәжәп ҙур тема - кеше яҙмышы, алда ни көтә тигәнде...

Ул әлеп ала: "Шоңҡар" һымаҡ әçәр тиһеңме? Шағирлыҡҡа маһирлығым юк минең. Мин дә ҙур тема күтәргәнмен, тик ул сәсмә әçәр. Эш ниндәй жанрҙа яҙылыуында түгел. Минең геройымдың яҙмышы бөтөнләй башҡа хәл-ваҡиғаларҙа кәүҙәләнә. Бур бур ғына түгел, ул үçә, бөтөнләй икенсе яҡҡа үҙгәрә".

Бик ихлас, мөкиббән китеп үҙенең"бур"ын маҡтарга ине иçәбе, йүткереп быуышып китеүе генә туҡтатып, тын алып, сәй эсеп алырға мәжбүр итте. Мин мандолинала уйнаным. Эй, белһәгеҙ икән, шул ваҡытта апайымдың күҙҙәрен тултырыш ҡарай алмай йәшкә мансылғанын!

- Ғәфу ит, йөрәккәйем, - тине йөҙөнә ҡулъяулығын ҡаплап. - Мин һине осратҡаныма ҡыуанып көләм, йөрәгемдән һине яратып, - ти.

Бына шул минуттарҙы иçкә алһам, хәҙер минең көлкөм килмәй. Апай һүҙен дауам итеп: "Шулай инде, һөйләп кенә аңлатып тормайым, уҡығас, һин дә яратырһың уны, - ти үҙенең бер геройы хаҡында. - Эйе, ҡарамаланы тамамланым инде "теге йортта" уҡ. Бына быныһын тамам әҙерләп бөттөм тигәнен дә (романын әйтә) ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡытыуға ла байтаҡ ваҡыт үтеп китте, һаман хәл ителмәй. Әйткәндәй,

ундағы геройҙарымдың исемдәрен дә, һүҙҙәрен дә кайһы бер яҙыусылар матбуғатта үҙ әҫәрҙәренә "элеп алып" файҙаландылар ҙа инде, — тип рәнйене. - Мин, - тине көлөмһөрәп, - һәр бер һүҙемде, тел бәйләнешемде танийым, был әйтемдәр ҙә әҫәремдә теп-тере баҫып тора".

- Апай, кемдәр улар?

- Кем уҡығанын беләһеңдер бит. Әйтеп кара һин уларға, баҫылмаған, донъя күрмәгән әҫәрең менән иҫбатлап кара әле! — ти. Шулай итеп, әсенеп һөйләнә лә уйланып кала, мин улай-былай итеп аш-һыу әҙерләгәнсе, тып-тын ҡағыҙҙарын караштырып ултыра. Әллә йоклап киттеме икән тип, күҙ һалам, юк, әкрен генә үҙ алдына һөйләнеп кырын төшөп ята, йә ниҙер һыҙғылай. Янына ашарға сакырырға килгәс: "Минең бер поэмам да бар әле, геройы бик һөйкемле ҡыҙыкай, һинең һымак, тап һин инде! - тигән була. - Тик ул Айбикәнән бүтәнерәк ҡыҙыкай, яңыса тормошка сат йәбешеп һәләтле шәхес булып үҫергә ынтылыусы. Уны яҙырға инәйем сәбәпсе булды, ул да китап укырға ярата ине. Бай, халыксан, башкорт инәйҙәренең күргән-күрмәгәнен, хәтирәләрен һеңдергән, кисергәндәрен һөйләп, хәтәр яҙмышты кәүҙәләндерергә ярҙам итте ул миңә. Унан үҙем белгән халык фольклорын да файҙаландым".

- Шиғыр менән яҙҙыңмы?

- Эйе, шиғыр менән яҙғайным да, моғайын, мин уны ла прозаға әйләндерермен дә ҡуйырмын тип торам... Бына шуны уйлап ятам әле, — ти.

Иҫ киткес Һәҙиә апайҙың бер генә минут тә уйламайынса, ижад итмәйенсә йәшәмәгәненә инандым. Уйҙары, ижады әленән-әле йүткереп, тын ала алмай киткән сағында ғына өҙөлөп торалыр. Юғиһә, йүткерә, сәсәй башлаһа, яулығын йөҙөнә каплап, тороп ултыра, йә иҙәндә йөрөп ҡарай. Шул вакыттарында ла бит, исмаһам, ауырыуы, көсһөҙлөгө, интегеүе тураһында бер генә һүҙ ыҫкындырһасы! Зарланмай ҙа, шул ерем ауырта, дауаланырға кәрәк, тип һөйләнмәй ҙә.

Ошо осрашыуҙан һуң ул миңә бер нисә тапкыр шылтыратты. Рәшиткә (Ниғмәти) минең турала наказдар биреүен әйтте. Унан больницала ятыуын, күп тормай санаторийҙа ял итеүен, дауаланыуын белдереп шиғри хат та яҙҙы.

Ҡыҙғаныс, миңә яҙылған хаттар төйөнсөгө менән юғалды. Миңә килгән дуҫ-иштәрем араһында төрлөләре булғандыр, ахыры.

Һуңғы тапкыр килеүендә Сафин ағай (ире) менән мине редакциянан аҫка (редакция Министрҙар Советы йортоноң дүртенсе ҡатында ине) телефондан сакырып төшөрҙөләр. Инде Һәҙиә апайҙың күтәрелеп йөрөр вакыты үткәйне. Төшһәм, хатта йылмайып, кинәнеп каршы алһалар ҙа апайымдың хәле бик мөшкөлләнгән. Ауыр тын ала, һауа етмәгәндәй интегә, дөрөҫө лә шулайҙыр, йөрәге лә шәп түгел. Улар миңә әлеге Луначарский баксаһына барырға тәкдим иттеләр. "Өфөгә килгәс, нисек итеп һине күрмәй китәйем, Кәтибә", — ти Һәҙиә апай. Бакҫаға индек. Унда Сафин ағай сакырған икән. Баксалағы ашханаға заказ биргән булып, шунда бер өҫтәл артына беҙҙе ултыртты ла, үҙе йүгереп йөрөп тигәндәй, бик итәғәт аш-һыу ташыны. Һәҙиә апай ултырған килеш ойоп китеп бара. Мин уны ауып-фәлән китмәһен тип: "Апай, һин аша, мин һыуһаным ғына, беҙ улым менән төшкө ашты ашағайнык", - тигән булам. «Гел йоклата ла тора. Ғәфү итә генә күр инде. Санаторийҙа - бигерәк бетеренгәнһең, ашарға кәрәк, тигәс, врачтар ни бирәләр шуны ашарға-эсергә тырыштым шул: компотын да, ҡымыҙын да, сәйен дә һемергәнмен, ә артык һыу йөрәккә ярамаған, йөрәкте боҙғанһың, тиҙәр.

Урыҫтарҙың һыналмыш көнөндәге турғай һымак булғанмын инде. Яҙ башында мартта ерҙә турғай эсерлек һыу ятһа, йыл якшы килә, тиҙәр бит әле. Һыуыкта ҡар һыуына һыуһаған турғайҙар һымакмын инде, ул турғай әллә өшөгән тиһеңме?" - тип көлә. Мин әйтәм: "Ул турғай ҙа йәйҙе һағынып, сараһыҙҙан ҡар һыуын, үҙең

әйтмешләй, һемергән инде". Ул шуға ҡыуанып: "Ҡара әле, ҡалай аҡыллы һүҙ әйтә был Кәти, - ти. Үҙе ашарға маташа. - Ағайың белмәйҙер әле, уны Рәшит "Кәти" ти ҙә ҡуя". Мин әйтәм: "Ул яңы исемде Назар ҡушты, шикелле". Ә Һәҙиә апай һаман әҙәбиәт, ижад, минең хәлдәргә туҡталып һөйләнде. "Рәшит ағайыңды бер көн күреп һөйләштем: Кәтибәне тиҙерәк Союзға ағза итеп алырға ярҙам итеш, минең көнгә ҡала ҡурмаһен инде, тинем. - Унан Сафин ағайға ҡарап, - Әйҙә, эшенә һуңлатып ҡуймайыҡ", - тип, алдан ҡапҡа юлына төшөп атлай ҙа башланы. Аяғында бушағырак әлеге күк туфли, үҙе атлай, үҙе башлаған фекерен дауам итергә онотмай: "Рәшит ағайыңды әйтәм, ысын, тыңлар ул Рәшит, мин уға апай ҙа бит әле", - ти.

Иҫ киткес! Уның ошо ваҡыттарҙа яҡты донъяларҙа йәшәргә аҙ ғына ғүмере ҡалһа ла, үҙен түгел, кеше яҙмышын ҡайғыртыуы, шул тиклем изгелеклелеген әллә ниндәй матур һүҙҙәр ҡушып, кинәйәләп әйтмәһәм дә уҡыусыға аңлашылалыр. Үҙе шул сәғәт-минуттарҙа бөтмәҫ-төкәнмәҫ хәстәргә мохтаж булған да бит! Нахаҡ ғәйепләүҙәр,шәхси ҡайғылар,яңғыҙ бөртөк улын юғалтыуы, һөйгән ире Ғөбәй Дәүләтшин ағайҙан ҡалыуы, донъяһының тар-мар ителеүе, әсәһенән, дуҫтарынан айырылып, төрмәгә ташланыуы, "теге йортта" (үҙе шулай әйтә ине) үткәргән ауыр ҙа, мыҫҡыллы ла ҡара йылдар! Ул бында ҡайтҡас та йылы һүҙһеҙ, йылы фатирһыҙ ине, киреһенсә, унан нисек тә ситтәрәк булырға, шуның менән бахыр тәндәрен һаҡларға тырышыуҙары ни тиклем ғәҙелһеҙлек! Ҡуй инде, хәҙер килеп, уның исемен телгә алып, лаф ороп, заманға, айырым кешеләргә ғәйеп ташлап зәһәр атыуҙан Һәҙиә Дәүләтшинаға һәм уның һымаҡ хаҡһыҙ кәмһетелеүселәргә ни файҙа?! Ярай әле изге күңелле ағай осрап, физик яҡтан бөтөнләй зәғифләнгән яҙыусыны, әсәһе менән бергә йылы ояһына һыйындырған. Сафин ағай: "Мин уның артабан да һис шикһеҙ яҙышасағына ышандым, бөйөк, аҡыллы ҡатын икәнлегенә һоҡландым..." — ти. Ябай эшсе кеше, оло йөрәкле Сафин (заготовитель) намыҫлы эше менән тырышып, юллап, уны санаторийға ебәреүгә өлгәште. Яҙыусыға булған мөхәббәте Һәҙиә апайҙың ғүмерен аҙмы-күпме оҙайтҡандыр ҙа. Хатында Һәҙиә апай: "Сафин ағайың юллап санаторийға ебәрҙе", — тип ҡыуаныслы хәбәр яҙғайны.

Минең Яҙыусылар союзына ағза итеп ҡабул ителеүемдә Һәҙиә апайҙың ҡатнашлығы ҙур булды. Үҙе иҫән сағында: "Рәшиткә әйттем, һине ағза итеп алыуҙы тиҙләтегеҙ, ярҙам ит инде, тинем", - тигәйне. Минең "Тәүге сәскәләр", унан "Алтын тояҡ аҡ кәзә" исемле, балалар өсөн йоҡа ғына китаптарым донъя күргәйне.

1957 йылда Һ.Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романы донъя күрҙе. Әҙәбиәт һөйөүселәргә сикһеҙ ҙур бүләк булды был китап. Ысынлап та, башҡорт әҙәбиәтенә генә түгел, донъя әҙәбиәтенә лә һиҙелерлек өлөш индергән "Ырғыҙ" романын шулай баһаланылар: "Башҡорт совет әҙәбиәте тағы бер һоҡланғыс әҫәр менән байыны: ваҡытһыҙ һәм аяныс үлгән талантлы яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романы баҫылып сыҡты. Кереш һүҙҙе һәм романды йотлоғоп уҡып сыҡҡас, ихтыярһыҙҙан татар халыҡ шағиры Ғабдулла Туҡайҙың 1912 йылда Хөсәйен Ямаштың үлеүе айҡанлы яҙған шиғырҙарының һуңғы юлы иҫкә төшә:

*"Беҙ уны ҡайҙан беләйек,*
*Меҫкен үлеп аңлатмаған".*

Ни эшләйһең бит, яҙмыш кешеләргә һаҡһыҙлыҡ та күрһәтеп ҡуя шул..." — тип әрнеп әйткәйне Баязит Бикбай.

Был ғәжәп талант эйәһе хаҡында СССР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Иосиф Брагинский ҙа үҙ һүҙен әйтеп ҡалдырҙы: "Башҡорт халҡының Һәҙиә Дәүләтшина шикелле изге ҡыҙы, талантлы яҙыусы тураһындағы хеҙмәт миндә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Әйткәндәй, яҙыусы минең ҡорҙашым да".

М. Минһажетдиновтың ғилми хеҙмәтендә лә яҙыусының портреты шул тиклем ышандырырлык һәм асык итеп тыуҙырылған, уны укып сыккас та тыуған тәүге тәьҫорат — уның үлеменән әрнеү тойғоһо.

Эйе, Һәҙиә Дәүләтшинаның ижады үлемһеҙ.

**//Ватандаш. – 1999. - № 2.- 66-72-б.**

**Т.Килмөхәмәтов**

# ИЖАДИ ПОРТРЕТТАР

# ЫРҒЫҘ БУЙҘАРЫНАН — ИЛ КИҢЛЕКТӘРЕНӘ

## (Һәҙиә Дәүләтшина)

Күренекле шәхестәрҙең тыуған йылы ғына була. Уларҙың үлгән йылы булмай. Күренекле шәхестәр, тереләрҙән-тере булып, быуындарҙан быуындарға күсә. Һәҙиә Дәүләтшина ана шундай токомдан. Ғүмеренә сик куйған бер мең туғыҙ йөҙ илле дүртенсе йылдан алыҫлашкан һайын, ул тererәк була барғандай, йәшәүенең, ижади эшмәкәрлегенең мәғәнәһе тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә, киңәйгәндән-киңәйә, тулыланғандан - тулылана һымак. Уны мәңге тере иткән, мәңге заманса иткән әйбер - һуңғы һулышкаса халыкка хеҙмәт итеү. Һәҙиә Дәүләтшина - халыкка хезмәт итеүҙең юғары өлгөһө ул. Бер хатында Александр Александрович Фадеевка ул былай тип яҙған: «Беҙҙең иҫ киткес гузәл тормошобоҙ, беҙҙең ысынбарлығыбыҙ менән һокланып йәшәнем, бөтә йөрәктән эшләнем мин, һәм тәрән шатлыклы тулкынланыу менән партия сафына баҫырға әҙерләндем... Мин шундай асык аң менән йәшәнем, кайҙа ғына булмайым, үҙемдең, марксистик-ленинсы караштарымдан сак кына ла тайпыла алманым... Мин һәр ерҙә совет һауаһын һуланым. Арыу-талыу белмәй хеҙмәт иттем». Халыкка, социалистик Ватанға, Коммунистар партияһына оло мөхәббәт менән тулы был юлдарҙа сағыу талантлы, корос ихтыярлы башкорт кыҙының, һокланғыс ғүмер юлы һынлана.

Башкорт халкының культура тарихында Һәҙиә Дәүләтшина - символик күренеш. Ижади шәхес һәм Революция осрашыуын символлаштыра ул. Революция уны социаль иҙеүҙән, дин иҙеүенән һәм катын-кыҙға кәмһетеп карауҙан азат итә, күңел түрендә баҙырап яткан талант саткыларын ялтлатып ебәрергә мөмкинлектәр аса. Ә батырлыкка, матурлыкка һыуһаған азат ителгән, титаник хеҙмәт аша бөтә һәләтлектәрен асып, балкытып, яңы тормоштоң, ысын төҙөүсеһе, ғорурлығы булып күтәрелә. Ьәм үҙ яҙмышы менән социалистик революцияның гуманистик миссияһын сағылдырыусы тере өлгөгә әүерелә.

1927 йылдың ун икенсе мартында «Башкортостан йәштәре» гәзитендә «Һылыукай пионерка» тигән кескәй генә хикәйә баҫыла. Уның аҫтына «Һәҙиә Дәүләтшина» тип имза куйылған. Буласак күренекле яҙыусының матбуғатта сыккан тәүге әҙәби әҫәре был. Шунан аллы-артлы «Айбикә» (1931), «Башактар тулкыны» (1932) кеүек повестар, «Һырга һабағы», «Партизан», «Дуҫтар», «Кыҙыл армеец Сынтимер», «Ул бер вакытта ла онотолмаҫ», «Еңелмәс батырҙар», «Кәкүк», «Бәхет кошо» кеүек хикәйә, очерк, нәҫерҙәре донъя күрә. Был әҫәрҙәр революция килтергән оло социаль үҙгәрештәрҙе бөтә куңеленән кабул итеүсе, шуға сикһеҙ һөйөнөүсе, шул тойғоларын, якын кешең менән сер бүлешкән шикелле, күңелдәргә үткәрерлек һүрәтләп биреүсе яҙыусы тыуыуын һөйләй ине. Утыҙынсы

йылдар укыусыһы уларҙа иң тәүҙә үҙен һәм үҙе йәшәгән дәүерҙе күрә. Һәм Һәҙиә Дәүләтшинаны үҙенең яраткан яҙыусыһы итеп күтәрә. Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ дүртенсе йылда ул, Башкортостан яҙыусылары делегацияһы составында, Мәскәүҙә СССР яҙыусыларының Беренсе ойошторолоу съезында катнаша. Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ бишенсе йылда Тимирязев исемендәге Башкорт дәүләт педагогия институтына укырга инә, каланың Ленин район советына депутат итеп һайлана, кала Советы уны Советтарҙың ғәҙәттән тыш унынсы Бөтә Башкортостан съезына делегат итеп ебәрә (билдәле булыуынса, был съезда СССР Конституцияһы тикшерелә һәм кабул ителә). Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ алтынсы йылда Минскиҙа үткән СССР Яҙыусылар союзы идараһының III Пленумында катнаша, «Октябрь» журналы редколлегияһына индерелә. Был йылдар яҙыусы ғүмеренең иң якты биттәре була. Дәүләтшина былай тип яҙа: «Һуңғы көндәрҙәге йөрәк тулкындарын, шатлыклы минуттарҙы һөйләргә, йөрәктән тулкынланып тышка сыккан был ялкынлы шатлыктарҙы тулы итеп аңлатырға һүҙҙәр етмәй кеүек, күпме генә һөйләһәң дә, уларҙы әйтеп бөтөп булмаҫ кеүек». Якты идеалдар, изге ынтылыштар менән канатланған йәш талант бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йылдың ун һигеҙенсе июнендә былай тигән: «...Горькийҙан өлгө алырбыҙ, уның шикелле үк бөтә ғүмерҙе, бөтә көстө көрәшкә бағышларбыҙ».

Күренеүенсә, барлы-юклы ун йыл арауығында Һәҙиә Дәүләтшина билдәле яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре булып таныла. Художниклык һәм гражданлык өлгөрөүендәге бындай йылдамлык, әлбиттә, утыҙынсы йылдарҙағы ижтимағи-сәйәси атмосфераға туранан-тура бәйле. Синфи көрәш фронттарындағы, ауылды коллективлаштырыу, илде индустриялаштырыу, фән һәм мәҙәниәт өлкәһендәге яңынан-яңы еңеүҙәр, ошо процеста яңы, социалистик шәхес формалашыуы әҙәбиәттә һәм сәнғәттә лә яңырыу, канатланыу тыуҙыра. Ошо тулкын Р.Нигмәти, Б.Бикбай, С.Агиш, Ғ.Сәләм, А.Карнай, С.Мифтахов кеүек талантлы йәш яҙыусыларҙы әҙәбиәткә алып килә. «Баҫыу хөкөмө», «Урман артында», «Ер», «Шоңкар», «Республика иртәһе», «Йәмле Агиҙел буйҙары», «Мәхмүтов», «Беҙ кайтырбыҙ», «Һакмар», «Карлуғас» кеүек поэма һәм шигырҙар, повесть, драмалар тулы тауышка яңғырай. Һәҙиә Дәүләтшинаны һәм уның әҫәрҙәрен дә әҙәбиәткә ана шул тулкын күтәрә. Ә яҙыусының шәхси кешелек һыҙаттары «Һәҙиә Дәүләтшина феноменының» субъектив яктарын күҙ алдына баҫтыра. Уның характерындағы хәл иткес сифат - тәүәккәллек, кыйыулык. Юғары, оло мәғәнәле тәүәккәллек һәм кыйыулык. Халыкта шундай бер һүҙ бар: «йөрәкле кеше». Ҙур эштәргә куркмайынса йөръәт иткән тәүәккәл һәм кыйыу кешеләргә карата әйтәләр был һүҙҙе. Һәҙиә Дәүләтшина ана шундай «йөрәкле кеше». Яҙыусының бөтә тормош юлы, ижади эшмәкәрлеге уның «йөрәкле кеше» булыуы, кыйыулығы, тәүәккәллеге хакында һөйләй...

Бер мең туғыҙ йөҙ егерменсе йыл. Яңы типтағы мәҙрәсәнең алдынғы укыусыһы буларак, урындағы Совет ойошмалары Һәҙиәне якындағы Диңгеҙбай ауылына (халык шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең тыуған төйәге) укытыусы итеп ебәрәләр. Уның революция эшенә һәм халыкка хеҙмәт итеүе ана шул көндән башлана. Һәҙиәгә был сакта ни бары ун биш йәш тула. Шул түгелме йөрәклелек!

Яҙыусының кыйыулығын һөйләүсе икенсе бер әйбер уның хикәйәләре менән бәйле. «Һылыукай пионерка» исемле ыксым ғына тәүге әҫәрендә ике дәүер - капитализм һәм социализм - араһындағы айырманы күрһәтеп биреү бурысын куя, пионерка Һылыукай менән уның картинәһе Төңөлдөк образдары аша уны бына тигәнсә хәл итеп сыға. Хикәйә кеүек бәләкәй әҙәби формала — эпохаль йөкмәтке. Шул түгелме йөрәклелек!

Һәҙиә Дәүләтшинаның кыйыулығын, тәүәккәллеген һөйләүсе йәнә бер күренеш

— уның повестары. Иç киткес тиҙлек менән үҙгәреүсе яңы тормошто әҙәбиәттә кәүҙәләндерә барыу өсөн яҙыусы үҙе йәшәгән заман менән, замандаштары менән, әйтерһең дә, ярышка сыға һәм «Айбикә», «Башактар тулкыны» әсәрҙәрендә утыҙынсы йылдарҙың хәл иткес күренештәрен — социализм төҙөү өсөн көрәш, ошо процеста социалистик шәхес формалашыуын социаль-психологик тәрәнлек менән кәүҙәләндереп бирә. Шул түгелме йөрәклелек!

Һәҙиә Дәүләтшинаға хас тәүәккәллек уның әҙәби тел өлкәһендә икеләнеүһеҙ яһаған аҙымында ла күренә: кайһы бер әҙәбиәт әһелдәре, башкорт әҙәбиәте ниндәй телдә яҙылырға тейеш - ауылсамы, каласамы? тип бәхәс куйыртып йөрөгән бер мәлдә, ул, тота ла, халыктың быуаттар буйы эшкәртелгән, мәңге тере хазинаһы - һөйләү теле байлыктарына мөрәжәғәт итә. Йәш башкорт совет әҙәбиәте өсөн принципиаль әһәмиәткә эйә ине был. Дәүләтшина прозаһының теле шул осор әҙәбиәте өсөн кыуанысл ы яңылык булыуын билдәләп, бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ бишенсе йылда Башкортостан яҙыусылары кәңәшмәһендә Булат Ишемгол былай ти: «Һәҙиә Дәүләтшина иптәштең әсәрҙәрен алып карағыҙ. Быларҙың халык теле байлыктарын файҙаланып яҙылған булыуҙарын кемдәр рәт итә ала? Һәм кемдәр шуларҙы архаизмда гәйепләй ала? Юк... был архаизм түгел, киреһенсә, улар башкорт әҙәби теленә һалынған хазиналар. Улар халыктың — башкорттоң тел байлыктарын тикшереү, өйрәнеү һөҙөмтәһендә килеп тыуғандар. Беҙ, үҙебеҙҙең тел тураһында һөйләгәндә, «беҙҙең тел ярлы» тигән концепцияны кулланырға яратабыҙ... ул ярлылык беҙҙең халык теле байлыктарын, фольклорҙы өйрәнмәүебеҙ, тикшереп файҙаланмауыбыҙ аркаһында килеп сыккан хәл. Беҙҙә Ғөбәй Дәүләтшин һәм Һәҙиә Дәүләтшина иптәштәрҙән башка фольклорҙы өйрәнергә тырышыусылар һәм үҙ ижадында уны файҙаланыусыларҙан Төхфәт Йәнәби, Дауыт Юлтый, Сәйфи Кудаш һәм һуңғы вакытта Сәләм иптәштәрҙе күрһәтергә мөмкин».

Һәҙиә Дәүләтшинаның кыйыулығы һәм тәүәккәллеге уның герой концепцияһында ла кәүҙәләнә. Кире образдарҙы тик кара буяуҙар менән, ыңғай образдарҙы һәм геройҙарҙы тик алһыу төҫтәрҙә генә һүрәтләү кеүек милли әҙәбиәттең ул дәүеренә хас бер яклылык ярайһы ук һиҙҙерткән бер мәлдә, ул характерҙарҙы, тормошта йыш булғанынса, катмарлылығында, каршылыклығында күрһәтеүҙең өлгөһөн бирә. «Айбикә»лә Юлдыбай, «Башактар тулкыны»нда Шакир — ана шундай характерҙар. Икеһе лә ярлы ғаиләнән сыккан, империалистик һуғыш яфаларын иңендә татыған, кулға корал тотоп революция яһаған кеше. Ләкин унан һуңғы йылдарҙа ... береһе, кыҙылдар менән киткән еренән юғала ла, мещан ғаиләһенә барып юлыға, шуны йырып сығырға көс тапмай йөрөй, икенсеһе колхозға инеүҙән баш тарта. Юлдыбай менән Шакир образдарында яңы кеше проблемаһы яңысарак хәл ителә. Әгәр Айбикәлә социалистик аңдың тыуыу эволюцияһы әҙмә-әҙлекле, тура юллы итеп бирелһә, быларында социализм осоро кешеһенең сыныҡыуы көтөлмәгән һикәлтәләр, бороло штар аша барыуы алға сыға. Бының менән яҙыусы социалистик шәхес формалашыу процесы ауыр, катмарлы, драматик характерҙа ла барыу ихтималлығын күрһәтә. Ошо хәл йәш прозаик Һәҙиә Дәүләтшинаның А.Фадеев, М.Шолохов кеүек танылған совет яҙыусыларының идея-эстетик платформаһына якын тороуын, формалашыусы башкорт совет әҙәбиәте өсөн яңы йүнәлеш йырыуын һөйләй. Шул түгелме йөрәклелек!

Ә инде үҙ ғүмеренең һәм халык тормошоноң хәтәр йылдарында арыу-талыуҙы белмәй, актык көсөнә тиклем биреп «Ырғыҙ» романын ижад итеү кыйыулык, тәүәккәллек кенә түгел, ә ысын каһарманлык булып әүерелде...

Һөйөү-һөйөлөүҙәрҙән генә лә мәңгелек бәхет табырлык сибәрлеккә эйә,

тыйнаҡ, баҫалҡы, өрһәң осоп китерлек был ҡатында бындай йөрәклелелек, бындай ныҡлыҡ, бындай оло йәнлелек ҡайҙан килә? Яуап бер: Тыуған илгә, халыҡҡа, Коммунистар партияһына тәрән һөйөү, ышаныс, уларҙың бәхете, сәскә атыуы өсөн бөтә көсөңдө, талантыңды бирергә ынтылыу.

Һәҙиә Дәүләтшинаның бөтә яҙғандары ике китапҡа һыя, әммә был китаптарҙан тыш башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыу һәм үҫеү юлдарын күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Яҙыусы өлгәшкән оло ҡаҙаныш - реалистик хикәйәләү оҫталығы - башҡорт прозаһына профессиональ төҫ бирҙе, хикәйә, повесть, роман кеүек әҙәби формаларҙы шул жанрҙарҙың донъя әҙәбиәтендәге эстетик асылына алып инде. Реалистик хикәйәләү реалистик характерҙар тыуҙырыуға килтерә. Ваҡиғалар кеше характерҙары аша яҡтыртыла, характерҙар уларҙың, үҙгәрә барыу процесында, бер-береһе менән мөнәсәбәте һәм бәрелештәрендә асыла, сюжет һыҙыҡтары характерҙар тарихы рәүешендә барлыҡҡа килә һәм үҫә. Характерҙы хәл иткес социаль һыҙаттарында асыу менән бергә, күңел донъяһының бөтә нескәлектәрендә лә тасуирланыуын күҙ уңында тотоп, Һәҙиә Дәүләтшинаны Баязит Бикбай «... прозала ысын шағир» тип атай.

Яҙыусының төп ҡаҙанышы булған реалистик хикәйәләү оҫталығы Һәҙиә Дәүләтшинаның ижад методындағы иң көслө яҡты ла асыҡ күҙ алдына баҫтыра: хеҙмәтсән халыҡта милли, социаль, революцион үҙаң үҫеүе, уның характерында яңы сифаттар формалашыуы, нигеҙҙә, тормош-көнкүрешкә бәйле рәүештә һүрәтләнә. Әйтәйек, «Ырғыҙҙа» рус-япон һуғышы, Россияла 1905—1907 йылғы революция, Беренсе донъя һуғышы, Февраль буржуаз, Октябрь Социалистик революциялары, граждандар һуғышы картиналары туранан-тура бирелмәй тиерлек, баталь картиналар аҙ. Ләкин был хәл романдың социаль яңғырашын кәметмәй, тормош-көнкүреш нигеҙендә барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡтар социалистик революцияның котолғоһоҙ икәнлеген, уның миллионлаған хезмәтсән халыҡтың, көндәлек яфалы тормошо менән туранан-тура бәйле булыуын асығыраҡ итә. Ярлы крәҫтиән малайы Айбулаттың, тормош университеттары үтеп, аңлы революционер булып етешеуе шул хәҡиҡәтте асыҡ һәм тулы кәүҙәләндерә. Персонаждарҙың ана шулай күберәк тормош-көнкүреш мөхитендә төрлө яҡлап, характер кимәленә еткереп һүрәтләнеүе башҡорт совет прозаһында ҙур яңылыҡ, новаторлыҡ күренеше ине.

Һәҙиә Дәүләтшинаның художниклыҡ сифаттары тулыһынса уның идеологик ҡараштарына, айырыуса дәүер һәм шәхес, халыҡ һәм тарих концепцияһына бәйле рәүештә формалаша. Кешенең физик, рухи мөмкинлектәрен бөтә тулылығында асыу өсөн бөтә шарттар тыуҙырған социализмды хеҙмәтсән халыҡты терелә́й гүрҙә тоткан капитализмға ҡарағанда тарихи прогрессив күренеш икәнлеген үҙ яҙмышында татыған һәм шуға бөтә аңы менән инанған яҙыусы улар араһындағы айырманы күрһәтеп биреү өсөн контраст алымына мөрәжәғәт итә. «Һылыуҡай пионерка» хикәйәһендәге Төңөлдөк әбей менән ейәнсәре Һылыуҡай, «Һырға һабағын»дағы Юлдаш инәй менән уның ейәнсәре Мәрйен — сағыу контраст образдар. «Һылыуҡай пионерка» бик мәғәнәле ошондай инеш менән асыла:

«Һылыуҡай, бөгөн һабаҡтан сыҡкас та аяҡтары ергә теймәй, ҡабаланып, йүгереп, өйҙәренә ҡайтып инде. Ингәс тә, унда-бында әләңләп ҡаранды, өйҙә өйлә намаҙын уҡып ултырған картәсәһе менән сәңгелдәктә йоҡлап ятҡан ҡустыһынан башҡа кеше күренмәне. Ул шуға кире йүгереп сығып китәм тип әйләнгәйне, ул арала картәсәһе, намаҙын уҡып бөтөп, битен һыйпай һалды ла:

- Һыу, ен ярсығы. Һин ҡайтҡанһың икән, мин кеше бармы тип торам тағы. Ни эшләп улайтып йылмаяҡланып йөрөйһөң? — тине. Һылыуҡайҙың ҡыуанысы эсенә һыймай. Ҡабалана-ҡабалана: — Ҡартәсәй, картәсәй? Ҡара әле, бына беҙгә галстук

бирҙеләр. Мин хәҙер пионерка булдым. Бер-ике көндән 8 Март байрамын яһайбыҙ, - тип, береһе артынан береһен теҙеп һөйләп китһә лә, картәсәһе:

- Йә, нәмәкәйгә күп ләңкелдәп тораһың. Малстук-һалстугыңда эшем юк, йөрөмә ир балаларга окшап! — тип кыскырҙы. Һылыукай картәсәһенә бер аҙ карап торзо ла, «һүҙ көрәштерһәң, барыбер ул аңламай, оҙакка китә, әсәйемә барып, һөйләп киләйем, ул, исмаһам, кыуаныр», тип уйлап, кире ишеккә боролдо».

Ике кеше — ике дәүер! Пионер булып кайтыуы шатлығын аңламаған картәсәһен ғәйепләмәй Һылыукай, был — карт кешенең ғәйебе түгел, ә бәләһе. Пионерка Һылыукай менән уның картәсәһе Төңөлдөк араһындағы караштар айырмаһы — социалистик дәүерҙең иҫке замандан айырмаһы ул. «Һырға Һабағы» хикәйәһендә комсомолка Мәрйен һәм уның өләсәһе Юлдаш образдарында ла ошо ук мотив үҫтерелә. Шул рәүешле, контраслы каршы куйыу алымы тормош дөрөҫлөгөн сәнғәт дөрөслөгөнә әуерелдерә.

Ҙур күләмле әҫәрҙәрҙә иһә контраст художестволы форманың бөтә сифат категорияһына күсә. Повестар өсөн, мәҫәлән, контраслы композицион рамка хас. «Айбикәнең» беренсе бүлеге героиняны һүрәтләүҙән башланып китә. Һуңғы бүлектә лә Айбикә бирелә. Шуныһы ла бар: беренсе бүлектә лә ул Ҡотлояр йортонда күрһәтелә, һуңғы күренештә лә Ҡотлояр урамында. Ләкин тыштан караганда бер иш күренгән башланыш һәм тамамланыш араһында тәрән эске йөкмәтке айырмалығы ята. Әҫәрҙең башындағы Айбикә - Ҡотлояр байҙың хеҙмәтсеһе, ә аҙакта — алдынғы трактористка. Ҡотлояр тәүҙә ауылдың данлыклы байы, аҙакта инде уның бейек йәшел түбәле ағаҫ өйөнөң урамға ҫыға торған солан өҫтөнә «Оло үҙән» колхозының правлениеһы» тип яҙып куйылған. Ошондай ук әҙәби алым артабан «Башактар тулкыны» повесында кулланыла һәм уҫтерелә. Әҫәрҙе башлап ебәреүсе бүлектә лә, аҙаккы бүлектә лә колхоз идараһы йортон үтәүсе Нәғим йортондағы колхозсылар йыйылышы тасуирлана. Ләкин йыйылыштың эске мәғәнәһе бер-береһенә бөтөнләй капма-каршы. Баштағы йыйылышта колхозсылар пассив, колхоз рәйесе булып алған кулактар куштаны Нәғимдең аҙым һайын короткослок эшләүен аңлар хәлдә түгел. Ә аҙаккы йыйылыш тәүгеһенең бөтөнләй киреһе: инде улар итәк аҫтынан ут йөрөтөүсе Нәғимдең ысын йөҙөн танып өлгөргән, колхозға етәкселек итеүҙе үҙҙәренең кулына алған аңлы, актив көс. Тимәк, ике осракта ла рухи яктан баҫылған ябай, хезмәтсән халык вәкилдәренең социалистик үҙгәрештәр барышында аңлы, аддынғы карашлы шәхес булып формалашыуы тулкынландыра яҙыусыны. Ләкин Һәҙиә Дәүләтшина был процесты ябайлаштырмай, ә реализм позицияларында торған яҙыусы буларак, катмарлы, каршылыклы күренеш рәүешендә күҙ алдына баҫтыра. Әҫәрҙең композиция төҙөлөшө ана шул процесты мөмкин тиклем тасуири һүрәтләп биреүгә буйһондоролған. Экспозиция менән финал араһындағы тышкы окшашлык һәм эске айырмалык - контраслы композицион рамка - геройҙар донъяһындағы үҙгәрештәрҙең киҫкенлеген тойорлок итер өсөн, эффектлырак күрһәтеү өсөн хеҙмәт итә.

Башкорт совет әҙәбиәтен үҫтереүгә Һәҙиә Дәүләтшина тарафынан индерелгән ҙур өлөш уның әҙәби тел өлкәһендәге каҙаныштары менән бәйле. Яҙыусының хикәйәләре, повестары һәм романы теленә хас төп сифат - тасуирилык. Шуны күҙ уңында тотоп, Сәғит Агиш былай тип яҙҙы: «Ул телде күргән, белгән, тойған, өйрәнгән вакиғаларҙы һөйләп биреү өсөн генә түгел, һүрәтләп (курсив беҙҙеке – Т.К.) биреү өсөн файҙаланды».

Һәҙиә Дәүләтшина теленә хас тасуирилык, пластикалылык әҙәби әҫәр тукымаһындағы күп компоненттарҙа: пейзаждарҙа, портретта, персонаждар телмәрендә, эске монологта һәм башкаларҙа күренә. Яҙыусы кәләме кағылған һәр

әйбергә, күренешкә йән керә, улар төрлө-төрлө төҫтәргә инеп йәшәй башлай, хәрәкәт итә, үҙгәрә, камиллаша.

Айбикә килен булып төшкән Шоңкар ауылын, уға ҡайғыһын да, шатлығын да услап-услап татыткан төбәкте бына ҡайһылай күҙ алдына баҫтыра һүҙ оҫтаһы:

«Яҙғы көндөң иртәнге йылы ҡояшы, ер өҫтөнә күтәрелгән кукһел быуҙарҙан үтә төшөп, уларҙы йәшелле-күкле, юлаҡ-юлаҡ төҫтәге матур нурҙарға әйләндерҙе.

Шоңкар ауылының тирә-як тигеҙлегенән һөҙәкләнеп барып бейегәйеп киткән ҡырлас тауҙар, унар саҡрымдарға һуҙылып алыҫаялар ҙа, Ирәмәлдең нәҙек һыҙыктар шикелле генә күренгән ҡаяларына барып тоташалар. Унан да уҙғас, Ирәмәл түбәһенең ҡайһы бер урындарында ала ҡармы йәки тауҙың битен һыйпап үтеп барған болоттармы икәне лә айырылмай торған ҡайһылары аҡ, ҡайһылары ҡара нөктәләр генә күренәләр.

Акҡондоҙ йылғаһының аръяғындағы сусаҡ тауҙың итәген ҡаплап үҫкән шыршы, ҡарағайҙар, йәшел ботаҡтарын яҙғы ҡар һыуына манып алған һымаҡ, тағы ла матур, тағы ла йәшелерәк булып асылғандар. Улар менән аралаш ҡайын сауҡалары ла, ваҡ ҡына булып шытып килгән бөрөләренең морондарын күрһәтеп, яҙғы йылы елгә елберәшеп ултыралар».

Һәҙиә Дәүләтшина телендәге пластикалылыҡ эске монолог сәнғәтендә лә асыҡ сағыла. Тыуған төйәгенән тәүге тапкыр айырылып, кейәү арбаһына ултырып, уның ауылына етеп килгәндәге Айбикәнең күңелендә тыуған уйҙарҙы яҙыусы былай тасуирлай: «Айбикәгә алыҫтан уҡ күренгән был ауыл әллә ниндәй ят, яңы кеүек тойолдо. Ундағы кешеләр ҙә әллә ҡалайҙарҙыр, Айбикә барғас, уны барыһы ла һынарҙар, һөйләрҙәр, көлөрҙәр, күрергә килерҙәр, тикшерерҙәр инде. Эшкә егәрлеме; атлағанда ҡалай баҫа; тиҙ йөрөймө; аяғын һөйрәп баҫмаймы; һыуға барғанда, көйәнтәһен ике яурынлап кутәрмәйме; һыулы силәктәрҙе, ерҙән күтәргәндә, сукәйеп күтәрәме, әллә беләгенә алып күтәрәме; ялтанлап ҡарамаймы; ирҙәр алдынан аркыры сыҡмаймы; ҡайнағаларынан тартына беләме, — быларҙың барыһын тикшереп торасаҡтар. Хәҙер инде, ҡыҙ ваҡыттағы ялан баш йөрөү урынына яулығыңды сөйә тарткан көйө яңылыш ҡына ишек алдына сыкһаң да, бөтә ауылға таралыр. Шуның өсөн хәҙер һәр аҙымыңды белеп баҫырға, һәр һүҙеңде уйлап һөйләргә, мөмкин тиклем ҡысҡырып көлмәҫкә тырышырға кәрәк ».

Телдең тасуирилығлы персонаждар телмәрен биреүҙә лә кәүҙәләнеш таба. Дәүләтшина геройҙарының ярылып ятҡан үҙ теле бар; һәр ҡайһыһын индивидуаль һыҙаттарын да, социаль сифаттарын да үҙ эсенә алған персонаждар телмәрен бутау мөмкин түгел. Котлояр байҙың, катыны Ғәйшә лә һөйләшеү манераһының үтә үҙенсә булыуы, башкаларға окшамағанлығы менән хәтерҙә ҡала. Уның телмәре былайырак янғырай:

- Бына беҙҙең Айбикә киленде әйтәм әле, бер эш мәнеһе белмәй бит. Әйтә-әйтә, өйрәтә-өйрәтә йәнен сыға. Хәйер, ул ни күреп үҫкән һүң. Әҙәм рәтле донъя көтөп, мал үҫтереп, аш-һыу тәрбиәләп өйрәнмәгән бит инде ул. Тик әлеге үҙеңдең яманың булғанға, йәлләп аҫрайһың. Ире ни, урыҫ булып киткән, ти бит инде. Коммунға яҙылгас, билдәле инде, урыҫ булмай, ҡайҙа барһын. Һуң инде анау йылды ана, кыҙылдар килеп инеп, беҙҙең Ишбулаттар ауылдан сығып киткәс ни, беҙҙең өйҙөң аҫтын-өҫкә килтереп, Ишбулатты эҙләтте бит. Ағаһын бикләтеп ҡуйҙы. «Улыңды тап, әфисәренде тап!» — ти. Инде урыҫ булмаған ҡайҙа. Әгәр ҙә ул ағай-эне хакын һаклаһа, атаһы менән бер туған ағаһын шулай итер инеме? Ҡуй инде, ул ваҡыттарҙы уйлаһаң, түбә сәстәрең үрә тора. Хоҙай ҡушмаған эш буламы һуң. Ишбулат ҡайҙа йөрөйҙәр, уныһын кем белә, шунда ла, ана шул кәһәр һуккан Юлдыбай ҡулына төшмәгәненә ҡыуанам. Атып үлтерер ҙә ҡуйыр ине. Иренең, шул

уҫаллыктарын уйлап, Айбикәне сәйнәп ташларҙай булам да, тағы ла хоҙайлығыңды уйлайһың».

Ошо телмәрҙә Ғәйшәнең һөйләшеү үҙенсәлектәре, караштар даирәһе, социаль тойғолары, теләк-ынтылыштары ап-асык булып китә. Артабанғы репликалары һәм кылыктарында инде уның был сифаттары конкретлаштырыла ғына бара. Бер генә эпизодта характерлы тип тыуҙырыу йүнәлешендә ҙур аҙым яһалған.

Әле һүҙ барған күренештәр: пейзаж, эске монолог, персонаждар телмәре ғөмүмән алғанда, әҙәби техниканың статик пландағы, хәрәкәтһеҙ предметтарҙы һәм күренештәрҙе тасуирлау саралары карай. Ләкин Һәҙиә Дәүләтшина прозаһында улар шундай бер тасуирилык, йәнлелек менән эшләнгән, үҙенән-үҙе характер тыуҙырыу саралары булып йәшәй башлай. Хатта портрет һүрәтләмәһе лә, хәрәкәтсән, теремек сифаттар алып, характер асыуҙа мөһим роль уйнаусы әҙәби компонентка әүерелә. Дәүләтшинаның, индивидуаль стиленә хас ана шул күренеш Котлояр портретында мыкты кәүҙәләнә:

«Котлояр карт — ауылдың якшы көн иткән байы. Ул элеккерәк замандарҙа йыл уртаһына бер нисә хеҙмәтсе, йә булмаһа ирле-бисәле ярлы кешене тамак хакына эшләтеп тота ине. Ә хәҙер батрак тотоусыларға договор яһарға, страховать итергә, уларға вакытлы түләргә, кейем-һалым бирергә кәрәк, уның өстөнә бай ҙа булып күренәһе... Ул бына шуларҙың барыһынан да котолоу өсөн, «яңыса», «советса» тоторға булып, ун биш-егерме һыйырҙы биш-алтыға, етмеш-һикһән һарығын егерме-утыҙға, иллеләп йылкыны ун алтыға калдырып, бейәне лә бишта генә һауа. Йәйге, кышкы йорт эшенә үҙенә килен тейешле Айбикәне аҫрарға алып, кыр эше, һабан, ашлык, бесән кеүек эштәргә вакытлы яллай. Уның Дутов вакытында актар менән Себергә касып китеп юғалған Ишбулаттан кала, ун туғыҙ йәштәрҙәге кыҙы менән ун етегә сыккан кесе улы Ишбулдынан башка бала-çағаһы юк. Быларҙан Көнһылыу - «яңғыз кыҙ», Ишбулды - «кинйә бала» булғанлыктан, икәүһе лә иркә, икәүһе лә бик кәҙерлеләр. Көнһылыу кала техникумында укып, яҙ көндәре һәм кышкы каникулдары ауылға кайта.

Ишбулды быйыл башлап калаға барһа ла, рабфакка инә алмай, кире кайтты. Уны, йәше бәләкәй булғанға күрә, алманылар. Документ яғы куркынысһыҙ ине. Уның «нағыҙ крәстиән балаһы», «эш стажы» - фәләндәре тураһында Котлояр карттың бажаһы - сельсовет рәйесе Абдулла барыһын да эшләгәйне.

- Йә, ярар, быйыл йәш икән, киләһе йыл барыр. Хәҙергә икенсе баҫкыс мәктәптең икенсеһендә укый. Киләһе йыл барыбер урынлаштырам мин уны. - Котлояр карт, түңәрәк кара һакалын, кыҙыл битен һыйпай-һыйпай, аяк салып ултырып, үҙенең корҙаш-тиңдәштәре, коҙалары менән кымыҙ, бал эскәндә, шулай һөйләнә.

Уның донъяһы теүәл: байлык якшы, тамак тук, өç бөтөн, ауырлыҡ күрмәй. Шуның өсөн дә ул өҙләкһеҙ шат, ғәмһеҙ, көлгәндә лә, ак тештәрен бөтөнләй асып, эйәгенең быуактарын яғаһына кыçып, катлау-катлау итеп, быуылып, оҙак көлә. Уның төçө лә, үҙенең йәше алтмыш биштәргә табанлаһа ла, әле йәштәрсә. Тик сәсендә генә биш-алты бөртөк ак бар, — унан зарар юк; ул да тик ана Ишбулат кайғыһының шойканы. Ләкин кайғырып та файҙа юк. Донъялар әле был көйө генә тормаç, иншалла, боронғо замандар әйләнеп китһә, бына кайтып килер уның оҙон буйлы, киң яурынлы купшы кәүҙәле, һәйбәт «боронғо» йәшел буҫтауҙан теккән гимнастеркаһының яурындарына укалар таккан Ишбулаты...»

Килтерелгән был өҙөктәрҙә яҙыусы теленә хас сәнғәтсә күркәмлектең бер, әммә берәгәйле яғы сағыла. Ә телдең һүҙ байлығына, ассоциатив нескәлектәренә, фонетик яңғыращ һәм синтаксик-стилистик төҙөлөш күп яклылығына караған үҙенсәлекле байлыктарҙы билдәләһәң, Һәҙиә Дәүләтшинаның күренекле һүҙ

оҫтаһы булыуы, башҡорт әҙәби телен байыҡтырыуға, уны художестволылыктың яңы бейеклектәренә күтәреүгә индергән өлөшө яҡшы аңлашыла. Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәренең тел байлығы — халыҡ теле ҡаҙнаһынан; шул уҡ ваҡытта яҙыусы тарафынан йөрәк ялҡындарын биреп, күҙ нурҙарын түгеп ижад ителгән үҙ һүҙе оҫтаЛЫҒЫ башҡорт теле мөмкинлектәренең яңынан-яңы ҡатламдарын һәм офоктарын асты.

Телдәге һәм сюжет-композициялағы колорит Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәренә полифониялылыҡ бирә. Был йәһәттән уның прозаһын оркестрға оҡшатырға мөмкин. Скрипка, виолончель, габой, альт һәм башҡаларҙың һәр ҡайһыһының үҙ сыңы, үҙ ауаҙы бар. Шул уҡ вакытта, ошо сыңдар һәм ауаздар бөтәһе бергә ҡушылып, оркестрҙың берҙәм ҡеүәтле тауышын барлыҡҡа килтерә.

Шуның шикелле, яҙыусының хикәйәләре, повестары һәм романында һәр характер, һәр реплика, пейзаж, портрет, сюжет йүнәлештәре бары тик үҙенсә йәшәй һәм тын ала, уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенсә көйө, төсө һәм моңо бар. Шуның менән бергә, улар, художниктың көслө ижади ихтыярына буйһоноп, теге йәки был әҫәрҙең, берҙәм, бөтөн һәм ҡабатланмаҫ рухын-һулышын барлыҡҡа килтерә. Шуларҙың бөтәһенән «Һәҙиә Дәүләтшина прозаһы стиле» тигән төшөнсә формалаша. Был стилде башҡа бер ниндәй стиль менән бутау мөмкин түгел.

Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәренең стилистикаһын барлыҡҡа килтереүҙә, уның прозаһына күп тауышлылыҡ, йәнлелек, ә иң мөһиме — «донъяның эпик торошо» иллюзияһын биреүҙә һөйләм конструкцияларының һығылмалылығы, ҫәнғәТсә текемлелек, оҫталарса күҙ алдына баҫтырылған халыҡ уйындары һәм йолалары, мәҡәл, әйтемдәр, йырҙар, хикәйәттәр, көләмәстәр мөһим әһәмиәткә эйә. Ә был, үҙ сиратында, халыҡсан типтар тыуҙырыуға, тормошто ысынбарлыҡтағыса тәбиғи ағышында һәм күп яҡлылығында кәүҙәләндерергә мөмкинлек бирә.

Александр Сергеевич Пушкиндың рус әҙәбиәте үҫешенә индергән хәл иткес ҡаҙаныштарын билдәләп, Федор Михайлович Достоевский былай тип яҙған: «Пушкин, рус яҙыусыларынан беренсе булып, һокланғыс ыңғай рус типтарын күҙ алдыбыҙҙан үткәрҙе, уларҙы халыҡ араһынан тапты. Был типтарҙың матурлығы, барыһынан да элек, уларҙың дөрөҫлөгөндә (курсив беҙҙеке — Т. К.); был дөрөҫлөк кире ҡаҡҡыһыҙ һәм күҙгә күренеп тора, ул типтарҙы инҡар итеү мөмкин түгел - улар ҡойоп ҡуйған шикелле баҫҡан». Һәҙиә Дәүләтшина прозаһының оло ҡаҙанышы — халыҡ араһынан табылған һокланғыс типтар һәм ул типтарҙа кәүҙәләнгән тормош дөрөҫлөгөндә. Уларҙың һәр ҡайһыһына ҡарата тиерлек Пушкиндың «Кеше яҙмышы — халыҡ яҙмышы» («Судьба человеческая — судьба народная») тигән үлсәме менән яҡын килергә мөмкин. Юлдаш, Айбикә, Айбулат, Гөлйөҙөм кеүек характерҙар үҙ яҙмышы аша башҡорт халҡының; егерменсе быуаттың, тәүге өс тиҫтә ярым йыл эсендәге ҡатмарлы ла, һокланғыс та юлын дөйөмләштерә.

РСФСР яҙыусыларының I съезында Леонид Соболев былай тип билдәләй: «Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын уҡымай тороп, башҡорт халҡының тормошон аңлау мөмкин түгел». Романға ғына түгел, яҙыусының бөтә әҙәби эшмәкәрлегенә һәм әҙәби мираҫына баһа ине был. 1967 йыл «Ырғыҙ» романы өсөн Һәҙиә Дәүләтшинага Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелде (үлгәндән һуң).

Яҙыусының тормош юлы, ижад ҡаһарманлығы тыуған халҡы тарихы менән генә сикләнмәй, уның Бөтә союз мәғәнәһе, әһәмиәте бар. Мәшһүр ҡаҙаҡ романисы Сабит Моҡанов ошондай юлдар яҙа: «Һәҙиә Дәүләтшинаның халыҡ тормошо тураһында монументаль роман тыуҙырыуы - ысын мәғәнәһендә ижади героизм ул... Һәҙиә Дәүләтшина - совет шәреҡе ҡатын-ҡыҙҙары араһынан сыҡҡан беренсе талантлы

романист».

Һәҙиә Дәүләтшинаның тәрән идеялы, коммунистик партиялылыҡ менән һуғарылған юғары художестволы ижады, халыҡҡа, партияға, Тыуған илгә хеҙмәт итеүгә арналған ҙур шатлыҡтар, тәрән тетрәнеүҙәр менән тулы ғүмере һоҡланғыс йыр булып яңғырай.

«Ырғыҙ» романына эшләнгән инсценировка буйынса ҡуйылған спектакль Салауат драма театрында ҙур уңыш менән барҙы. Романға нигеҙләнеп, Рәүеф Мортазин менән Рағиҙә Янбулатова «Дауыл» тигән опера ижад итте. Был гүзәл кеше һәм оло яҙыусыға арнап күпме шиғыр, мәҡәлә яҙылған. Марат Минһажетдинов «Һәҙиә Дәүләтшина» тигән тәрән йөкмәткеле монография сығарҙы. «Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр» исемле йыйынтыҡ. донъя күрҙе. Яҙыусының, художестволы портреттары тыуҙырылды. Һәҙиә Дәүләтшина һыны бюска күсте. Ғәзиз Мөхәмәтшин эшләгән был һоҡланғыс сәнғәт әҫәре Бөрө дәүләт педагогия институты ҡаршыһындағы баҡса эсендә ғорур тора. Бөрө ҡалаһының бер урамы Һәҙиә Дәүләтшина исемен йөрөтә. Башҡалабыҙ Өфөлә лә Һәҙиә Дәүләтшина урамы бар.

Ә иң мөһиме - яҙыусы әҫәрҙәре, уның аҡҡош йыры булған «Ырғыҙ» романы башҡорт, рус телдәрендә ҙур тираж менән ҡабат-ҡабат баҫтырып сығарыла, туғандаш халыҡтар телдәренә тәржемәләрҙә донъя күрә, тормошҡа аяҡ баҫҡан һәр яңы быуындың, ҡулына күсә, мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында өйрәнелә. Һәҙиә Дәүләтшинаның Ырғыҙ буйҙарынан башланған ғүмер юлы ил киңлектәрендә тынғы белмәй дауам итә.

**//Кильмухаметов,Т. Халыҡсанлыҡ көсө. Әҙәби тәнкит мәҡәләләре, ижади портреттар. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте,1998. – 304-316 б.**

**Әнғәм Атнабаев**

## Һары сәскәләр

***Һәҙиә апай Дәүләтшина иҫтәлегенә***

Иҫән сактарында килә алманым,
Иҫәндәрзең
Ҡәҙерен беләме ни иҫәндәр ?!
Была бөгөн ҡәберенә килдек,
Ҡәберенә гөлдәр үҫкәндәр.
Гөлдәрендең шау сәскәле сағы,
Сәскәләре тотош һарынан.
Әйтерһең дә, ҡәбер - һинең йөзөң,
Һәм йөҙөңә һары һарылған.
Һары ҡайғы. Был сәскәләр бәлки,
Ҡайғыларың булып үҫкәндер.
Ҡайғыларың төҫлө һары икән,
Сабырлыкта һары төҫтәлер.
Сабырлыктың бөйөк үрнәге һин.
(Сабыр төбө - һары алтындан.)
Был донъяла бик күп нәмә һары:
Йырсы һандуғастар, усактағы ялкында;
Якындарҙың хыянаты һары,
Көҙөн һары кайын япрағы,
Ҡайын япрағындай һары була
Кешеләрҙең моңло аһ-зары.
Һин шуларҙы йөрәгеңә йыйып,
Бер һандуғас булып йырланың.
Ирҙәр бөгөлгәндә, бөгөлмәйсә
Ҡалыуҙары ауыр булғандыр.
Һиңә хәҙер бер ни кәрәк түгел:
Зәңгәр күк тә, йәшел тирәк тә,
Алға-гөлгә буяп мактауҙар ҙа,
Арзандан да, сөсө хөрмәт тә...
Йылы һүҙгә мохтаж сағыңда ла
Яҙмыш һиңә кара боҙ аткан,
Һуңғы юлыңа ла ҡайғы төҫө -
Һары сәскә биреп оҙаткан.
Бөгөн шулар йөрәгеңдән сығып,
Ҡәбер йөҙөн каплап үҫкәндәр.
Иҫәндәрҙең ҡәҙерен белер өсөн
Ҡәберенә килә иҫәндәр ...
Ҡәберенә килә иҫәндәр ...

1968.